✓ Бер саҡ Аркадий Гайдарҙан хәрби дуҫтары былай тип һорай икән: "Һеҙ үлемгә нисек ҡарайһығыҙ?" "Кире ҡарайым", - тип яуап биргән Гайдар. "Ни өсөн улай булғас пуля аҫтына ауыһыҙ ташланаһығыҙ?". "Йәшәү өсөн", тип яуап биргән Гайдар.


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

21 - 27 АПРЕЛЬ (АЛАҒАРАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№16 (486)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


Шәжәрәлә...

тарих йәшәй



5

Һәр бер милләт...

үҙ тарихын үҙе яҙырға тейеш түгелме ни?



6

Суверенитет - ул...

милли хәрәкәттең ҡаҙанышы



8-9

Наурыҙ, наурыҙ...

именлек һәм шатлыҡ килтер



11

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Өфөлә һәм республикала ниндәй ҡомартҡыларҙы һәм тарихи урындарҙы беләһегеҙ?

**Харис ҒИЛМАНОВ:** Республикала ғорурланып һөйләрлек, ситтән килгән ҡунаҡтарға күрһәтерлек тарихи ҡомартҡылар бик күп. Баш ҡалала ғына ла уларҙы әллә күпме һанарға була. Мәҫәлән, Ленин урамындағы Аксаков йортон алайыҡ. 1909 йылда башланған төҙөлөш эштәре 1920 йылда ғына тамамлана. Йорт ике төрлө стилде берләштерә - Ленин урамы яғынан ҡарағанда унда урыҫ классицизмы, ә Пушкин урамынан күҙ һалғанда мосолман, көнсығыш стиле өҫтөнлөк итә. Был йортто төҙөүгә аҡса йыйыу менән ул саҡтағы Өфө губернаторы А.С.Ключарев үҙе етәкселек иткән һәм ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә Өфө байҙарынан 200 мең һум аҡса йыйыуға өлгәшкән. Төҙөлөш өсөн кәрәкле ҡалған 300 мең һум бөтә Рәсәй буйлап йыйылған. 1917 йылғы революциянан һуң был йортта госпиталь, унан һуң драма театры һәм ҡурсаҡ театры, 1928 йылдан Хеҙмәт һарайы булған, ә 1938 йылдан бында Опера һәм балет театры урынлашҡан. Көн дә янынан меңәрләгән кеше үтеп йөрөгән йорт бына ниндәй тарихҡа эйә!

Шулай уҡ бөгөнгө көндә өфөләләрҙең һәм ҡунаҡтарҙың яратҡан урыны - Ҡунаҡһарай йорто ла бай тарихҡа эйә мәҙәни ҡомартҡы. Ағастан төҙөлгән тәүге Ҡунаҡһарай йорто 1759 йылда янып юҡҡа сыға һәм 1820-1836 йылдарҙа архитектор А.И.Мельников проекты буйынса таштан яңынан эшләнә. Яңы Ҡунаҡһарай йортоноң 56 тышҡы һәм 52 эске һатыу урыны була. Ваҡыт үтеү менән бина ныҡ ҡаҡшай һәм уны бөтөнләй емереп ташлау хаҡында һүҙ алып барыла, ләкин йәмәғәтселектең ҡаршы сығыуы был тарихи һәм архитектура һәйкәлен һаҡлап ҡалырға ярҙам итә. 1996 йылда яңынан үҙ ишектәрен асҡан сауҙа-күңел асыу комплексы 100 йыл элек булған Ҡунаҡһарай йорто кеүек үк эшләнгән. Уйлап ҡарағыҙ: ике быуыт элек тә бында, бөгөнгө көндәге кеүек, берәүҙәр һатҡан, икенселәр һатып алған, өсөнсөләр күңел асҡан.

**Гөлнар СӘЛИМОВА:** Мин тәү сиратта XIV быуатҡа ҡараған археологик ҡомартҡыны - Хөсәйенбәк кәшәнәһен билдәләп үтер инем. Эҙләнеүҙәр алып барған ғалимдар кәшәнәлә 9 ҡәбер барлығын асыҡлаған. Ҡыҙғанысҡа күрә, кәшәнә ҙур үҙгәрештәргә дусар булған, ләкин айырым фрагменттарға таянып, уны мосолман йолалары менән яҡшы таныш оҫталар эшләгәнлеген билдәләргә була, ти белгестәр. Шулай уҡ ғәрәп телендәге яҙыу ҙа һаҡланған. Уға ярашлы, кәшәнәлә Башҡортостанда ислам динен таратыусы кеше күмелгән. Хөсәйенбәк кәшәнәһе - мосолмандарҙың айырыуса һанланған изге урыны һәм уның хаҡында барыһы ла, бигерәк тә балалар, белергә тейеш, сөнки үткәненә һәм тарихына ихтирамлы була белгән халыҡтың ғына киләсәге яҡты буласағын онотмайыҡ. Бөгөнгө көндә кәшәнә урынлашҡан Аҡзыяраттың дәүләт тарафынан һаҡланған тарихи ҡомартҡылар рәтенә индерелеүен был йәһәттән оло эш, тип билдәләп була.

(Дауамы 2-се биттә).

ИҒТИБАР!

## БӘЙГЕГӘ САҠЫРАБЫҘ!




Интернетта "Киске Өфө" гәзитенең бәйгеһен иғлан итеүебеҙ тураһында хәбәр иткәйнек инде: **"Алдар менән Ерәнсә ҡоро"**на башҡорт юморы оҫталарын саҡырабыҙ. Ысын юмор, мәрәкә, мәҙәк, лаҡап, көләмәстең иң кәттәһе халыҡтың йәнле аралашыу мөхитендә йәшәй икәнен беләбеҙ. Һуңғы ваҡытта сәхнәләрҙә тоҙһоҙ һәм "билдән түбән" мәрәкә һөйләүселәр күбәйеүен иҫәпкә алғанда, ысын юморҙы эҙләп халыҡ араһына сығыу мөҙҙәте еткәне аңлашыла.

Шуға ла юмор оҫталарына мөрәжәғәт итәбеҙ: "Һеҙҙең ауылда нисектер, ә бына беҙҙең ауылда..." тип башлағыҙ һүҙегеҙҙе һәм йәшәгән төбәгегеҙҙәге, ауылығыҙҙағы лаҡап, көләмәс, мәрәкә хәлдәрҙе видеотаҫмаға яҙҙырып, "Вконтакте" сайтындағы "Киске Өфө" төркөмө"нә (**vk.com/kiskeufa**) ҡуйығыҙ. Тулыраҡ мәғлүмәтте лә шул сайтта табырһығыҙ. Бәйгебеҙҙә балалар ҙа, йәше-ҡарты ла ҡатнаша ала. Уға йомғаҡ июнь баштарында яһала һәм еңеүселәргә иҫтәлекле бүләктәр тапшырыла. Бәйгегә ҡушылығыҙ, мөхтәрәм йәмәғәт!

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ӘКИӘТТӘ - ХӘҠИҠӘТ...

### әкиәтселә - киләсәк дилбегәһе

**Мәктәптәрҙә башҡорт теле дәүләт теле булараҡ өйрәнелә башлаған ваҡытта, балалар туған телебеҙҙе һөйләшеү теле кимәлендә булһа ла белһен, тигән фекер менән дә ризалашырға әҙер инек. Баҡтиһәң, ҙур аҙымдар бәләкәйҙәренән башлана икән. Үткән аҙнала баш ҡалала "Һаумы, һаумы, әкиәт!" донъя халыҡтары әкиәттәрен башҡорт телендә һөйләүсе йәш әкиәтселәрҙең III төбәк-ара бәйгеһенең Гала-концертын, унда ҡатнашыусы уҡыусыларҙы күргәндән һуң, башҡорт теленең юғарыраҡ кимәлгә күтәрелеп, һөйләү теленә әүерелә барыуына инанырға насип булды.**

(Дауамы 11-се биттә).



Гран-при яулаусылар Нурия Зәйнуллина менән Илмир Бикҡужин.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Өфөлә һәм республикала ниндәй комарткыларҙы һәм тарихи урындарҙы беләһегеҙ?

(Башы 1-се биттә).

***Азат СӘЛИХОВ:*** М.Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының тарих факультетында уҡыған йылдарҙа Башҡортостандың төрлө төбәгенә археологик ҡаҙыу эштәренә йөрөгән мәлдәр ғүмеремдең иң матур һәм иҫтәлекле хәтирәләре булып һаҡлана. Йәйге сессия тамамланыу менән республиканың төрлө төбәгенә барабыҙ ҙа, мауығып китеп ҡаҙыу эштәренә тотона инек, сөнки табып алған һәр бер әйбер, бәләкәйме ул, ҙурмы, бөтөн көйөнсә һаҡланғанмы йәки ниндәйҙер өлөшө генәме - барыһы ла цивилизация башланғысы кеүек ҡабул ителә ине беҙҙең тарафтан. Ошондай экспедициялар менән беҙ Бәләбәй, Баймаҡ һәм башҡа районд арҙа булдыҡ һәм төрлө әйберҙәр табыу бәхетенә өлгәштек. Бәләбәйҙә, мәҫәлән, Алтын Урҙа осорона ҡараған тәңкә, биҙәүес һәм башҡа әйберҙәргә юлыҡтыҡ. Ғөмүмән, Башҡортостан ере төрлө археологик ҡомартҡылар һәм тарихи урындарға бай төбәк. Ләкин, ҡыҙғанысҡа күрә, уларҙың баһаһын аңлап һәм баһалап бөтмәйбеҙ. Мәҫәлән, Иглин районы Шипово ауылы янында ҡара абыҙ мәҙәниәтенә ҡараған (караабызовская культура), беҙҙең эраға тиклемге 4-се һәм беҙҙең эраның 3-сө быуаты менән билдәләнгән Шипово ҡәберлеге һәм ҡаласығы бар. Ҡәберлек ике өлөштән тора, улар хронология һәм күмеү йолаһы менән айырыла. 4-7 ҡәберлектән торған көньяҡ-көнсығыш өлөшө беҙҙең эраға тиклемге I-IV быуаттарға ҡарай. Бындағы 62 ҡурғандың 23-дә ҡаҙыу эштәре үткәрелгән. Уларҙа һуғыш ҡоралдары, ат кәрәк-яраҡтары һәм бронзанан эшләнгән биҙәүестәр табылған. Ҡәберлектең көнбайыш өлөшө беҙҙең эраның I-III быуатына ҡарай. Бында иһә 400-ҙән ашыу ҡәберлек өйрәнелгән. Уларҙа башлыса ҡорал, бронза биҙәүестәр, быяла муйынсаҡ һәм быяла һауыт-һаба табылған. Шулай уҡ ҡәберлектән 200 метр алыҫлыҡта майҙаны 150 мең квадрат метрға еткән ҡаласыҡта ла төрлө әйберҙәр табылған. Ә бөгөнгө көндә был уникаль археологик ҡомартҡы урынлашҡан биләмә баҡса бүлемдәре өсөн ҡулланыла. Күҙ алдына баҫтырығыҙ: беҙҙең аяҡ аҫтында беҙҙең быуатҡа тиклем булған тарих ҡыйрала, боронғо мәҙәниәт юҡҡа сыға. Ә үҙ сиратында был урында тағы ла етдиерәк һәм төплөрәк ҡаҙыу эштәре уҙғарып, реставрациялап, музейға әйләндергәндә республика халҡы өсөн дә, туристарҙы йәлеп итеү өсөн дә иҫ киткес урын булыр ине, тип уйлайым.

**Гөлназ САФУАНОВА**
**яҙып алды.**

БАШ ЙОРТТА...

# ТАҘАРТҠАН УРЫНДА ТҮГЕЛ,

## сүпләмәгән урында таҙа



**Тәүге тапҡыр Өфөгә килеүем әле булһа иҫтә. Иртә таңда поездан килеп төшкәс тә, баш өҫтөндә ҡыйылып-ҡыйылып осҡан яр ҡарлуғастарын күрҙем, шуға күрә Өфө миңә хәҙер нәҡ ошо ҡоштар менән ассоциациялана. Ниндәй ҡалаға барһам да, тәү сиратта ҡоштар барлығын күҙҙән үткәрәм һәм күп осраҡта уларҙың юҡлығын күрәм, ә тереклек булмаған ҡала йәнһеҙ ҡала кеүек.**

Ә Өфө бик йәнле һәм йәмле ҡала. Шау-гөр килеп торған урамдары, ҡайҙалыр ашҡынып-ашығып китеп барған кешеләре, кистәрен мең төҫкә мансылып балҡыған урамдары - барыһы ла күңелгә яҡын һәм ҡәҙерле. Өфөлә йәшеллеккә ҙур иғтибар бүлеүҙәре ҡаланы тағы ла матурайта. Мәҫәлән, күп ерҙә күҙәткәнем бар: ағастар тәртипһеҙ рәүештә үҫеп ултыра, ә беҙҙә ҡартайған ағастарҙы ҡырҡып, ҡалғандарын тигеҙләп, кәрәкмәгән ботаҡтарын ҡырҡып ҡына торалар. Шулай уҡ төрлө ойошма, студент ятаҡханалары алдында матур, ҡупшы итеп ҡырҡылған ҡыуаҡлыҡтарҙың булыуы оҡшай. Ләкин ҡайһы бер моңһоҙҙар ошо матурлыҡты юҡҡа сығара. Оҙаҡламай матур булып муйыл, сирень, алма ағасы сәскәләргә күмеләсәк, ә кемдер уларҙы тәләфләп-өҙөп ырғытасаҡ. Шуға күрә яҙын умырзая өҙгәндәргә штраф һалған кеүек, ошо ағас сәскәләрен юҡ итеүселәрҙе лә язаға тарттырыу ысулын уйлап тапҡанда шәп булыр ине. Шулай уҡ ҡайһы берәүҙәр урамда китеп бара, сүп-сарын артынан ташлап бара. Бындай тәртипһеҙлек бары тик тәрбиә юҡлыҡтан, үҙ-үҙенде хөрмәт итмәүҙән килә, шуға күрә өфөлөләргә урам һепереүселәрҙе әрләгәнсе, тәү сиратта, үҙ тәртиптәренә иғтибар итергә кәрәк. Бала өсөн дә тәүге өлгөнө нәҡ ололар күрһәтә һәм үҙебеҙҙе ошо рәүешле тотһаҡ, балалар беҙҙең ҡылыҡты ҡабатлаясаҡ ҡына.

Сүп-сар тигәндән. Ҡайһы бер йорт ихаталарында сүп-сар һауыттары тирәһендә шул тиклем бысраҡ, яҡын барыуы ҡурҡыныс, ҡарап тороуы имәнес. Бында ғәйеп ике яҡлы, тип әйтергә кәрәк. Беренсенән, ҡый ташыусы машиналарҙың һәйбәтләп йыйып бөтмәүе, ә икенсенән, кешеләрҙең бер-ике аҙым атлап, контейнерға барып етергә йыбанып, сүп-сарын контейнер тирәһендә ҡалдырып китеүе. Бер-береңә ихтирам һәм хөрмәт булғанда ғына матур тормошта йәшәргә була икәнлеген онторға ярамай беҙгә. Тағы ла күңелде ҡырған әйбер - ҡайһы бер ойошма йәки шәхси кешеләрҙең үҙ хеҙмәтен тәҡдим иткән реклама буклеттарын махсус урынға түгел, ә ҡайҙа етте - шунда йәбештереп китеүҙәре. Подъезд, магазин ишектәрендә, электр бағаналарында йәки ағастарҙа елберләп торған был ҡағыҙ киҫәктәре тирә-яҡты йәмһеҙләй һәм ошо рәүешле рекламаланған хеҙмәттәр етди түгел, ә мутлашыу кеүек ҡабул ителә. Бындай мәғәнәһеҙлекте бөтөрөү өсөн ҡала округы хакимиәтенә ниндәйҙер сара уйлап табырға кәрәктер.

**Ришат ЛОҠМАНОВ.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2012 йылдың икенсе яртыһында ла өйҙәрегеҙгә "Киске Өфө" гәзите килеүен, уның аша зиһенде ҡуҙғытыр, йөрәкте ярһытыр, рухты күтәрер, сәмгә ут һалыр мәғлүмәт алырға теләйһегеҙме? Улайһа, июнь айы бөткәнсе почтаға инеп, баҫмабыҙға яҙылыу мөҙҙәтен оҙайтып ҡуйырға онотоп ҡуймағыҙ.**



Учалы ҡалаһының башҡорт теле уҡытыусылары.

Кем "Киске Өфө"гә апрелдә үк яҙылып ҡуйған, квитанцияһын редакциябыҙға ебәреп, бәхетен һынап ҡараһын: **өс кеше "400 башҡорт халыҡ йыры" китабына эйә буласаҡ.**

Квитанцияларығыҙ менән бергә **тыуған көндәрегеҙҙе лә** хәбәр итегеҙ. Гәзитебеҙ аша уҡыусыларыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атаәсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

"Киске Өфө"нөң индексы - 50665. **2012 йылдың икенсе яртыһына яҙылыу хаҡы - 354 һум 24 тин.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов етәкселегендәге рәсми делегация Францияла булды. Башҡортостан делегацияһы По ҡалаһында Turbomeca компанияһының вертолет двигателдәрен етештереүсе заводында булды. Turbomeca эксперттары фекеренсә, 15-20 йылдан һуң көнбайыш илдәре баҙарының күпселек өлөшөн Рәсәй вертолеттары биләйәсәк. Рәсәйҙә "Өфө моторҙар эшләү производство берекмәһе" асыҡ акционерҙар йәмғиәте Франция компанияһының партнеры булып тора.

✓Өфөләге Конгресс-холда "Ислам. Йәштәр. Киләсәк" республика форумы үтте. Унда Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов сығыш яһаны һәм йәштәр араһында әхлаҡлылыҡтың, мәҙәниәттең түбән кимәлдә булыуы, енси тәртипһеҙлек, суицид, эскелек һәм наркоманлыҡ таралауы айҡанлы борсолоуын белдерҙе. Был кире күренештәргә ҡаршы тороуҙа "Айыҡ Башҡортостан" төбәк хәрәкәте эшмәкәрлеге яҡшы өлгө булып тора, тип билдәләне Президент.

✓Парижда Рөстәм Хәмитов Франция Сенатында булды һәм Рәсәй-Франция хеҙмәттәшлеге мәсьәләләре буйынса һөйләшеүҙәр үткәрҙе. Башҡортостандың һәм Францияның эшлекле даирәләре сәнәғәт производствоһы, ауыл хужалығы, һаулыҡ һаҡлау һәм фән өлкәләрендә бәйләнештәрҙе үҫтереү мөмкинлектәре хаҡында һөйләште. Башҡортостан Президенты Франция сенаторҙарын республикаға яуап визиты менән килергә саҡырҙы. Үҙ сиратында, Рөстәм Хәмитов 2012 йылдың декабрендә Франция Сенатында Башҡортостан тураһында доклад менән сығыш яһарға ризалыҡ белдерҙе.

✓"Ислам. Йәштәр. Киләсәк" республика форумында Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов, осрашыуҙа ҡатнашыусыларҙы сәләмләп, республикала хәләл индустрияны үҫтереү тураһындағы фекере менән уртаҡлашты. Атап әйткәндә, ул күптән түгел республикала тәүгә шәриғәт ҡанундарына ярашлы хеҙмәттәр күрһәткән "Восток-Капитал" банкының асылыуы хаҡында билдәләне. "Шәриғәт ҡанундарына ярашлы бындай финанс хеҙмәттәр күрһәткән банктары булған төбәктәр иҫәбенә республиканың инеүе бик ҡыуаныслы. Кешеләрҙең һайлап алыу мөмкинлеге булырға тейеш - ғәҙәти коммерция банкы йә ислам банкы", - тип билдәләне Президент.

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

**Ошо боронғо мәҡәләлә халҡыбыҙ ҡан яҡынлығын, уның тартыу көсөн танып, йәндең был халәтен инҡар иткән икән, тимәк, ул төшөнсә булараҡ ҡына түгел, энергетик матдә, есем булараҡ та йәндең барлығын таныған тигән һүҙ. Сөнки, философия законы буйынса, инҡар итеүҙе инҡарлап булған тәҡдирҙә лә, булмаған әйберҙе, матдәне һәм төшөнсәне инҡар итеп булмай. Юҡтың аты юҡ, йәғни булмағандың хатта аты-исеме лә булмай, тиҙәр бындай осраҡта. Ошо күҙлектән сығып ҡарағанда, "Йән тартмаһа ла, ҡан тарта" мәҡәлен беҙ йәндең матдә булараҡ барлығын иҫбатлаусы әйтем итеп тә ҡарай алабыҙ.**

# ЙӘН ТАРТМАҺА ЛА...

## ҡан тарта



Халыҡ араһында сәсән-йыраусы тигән даны сыҡҡан Спартак Ильясовтың "Ағиҙел" журналының быйылғы 1-се һанында баҫылған "Сағымдағы олоу" тигән бәйәнен уҡығандан һуң оҙаҡ ваҡыт күңел тынлығы таба алмай йөрөнөм. Йәшермәйем, уның тәьҫиренән һуң булмышым сөңгөләндә "асырғаныу бүреһе" олоно. Был олоу тауышын ишеткегеҙ килһә, тиҙ арала бәйәнде табып уҡырға тәҡдим итәм. Ҡасандыр күренекле ҡырғыҙ яҙыусыһы Сыңғыҙ Айтматовтың "Язалау урыны" тигән романын уҡығандан һуң да ошоға оҡшаш тойғолар кисергәйнем. Әле килеп "Сағымдағы олоу" бәйәне Сыңғыҙ Айтматовтың шул романын хәтерләтте. Был да юҡҡа түгел, сөнки ике әҫәрҙең дә үҙәк урындарының береһен бүреләр билә. Дөрөҫөрәге, Айтматовта бүреләр яҙмышы кешеләр яҙмышы менән йәнәш ҡуйылып, уларҙың тормошон ҡатмарландырһа, ҡапма-ҡаршылыҡлы итһә, Ильясовта иһә, нәҡ киреһенсә, бүреләр үҙәк урында, ә кешеләр эпизодик фонды ғына тәшкил итә. Бүреләр менән кешеләр араһында эттәр тора. Эт был осраҡта цивилизацияға, глобаллашыуға дусар ителгән бүре сүрәтендә. Барыһынан бигерәк бәйәндә Спартак Ильясовтың бүреләр тормошон, уларҙың психологияһын тәрән белеүе хайран ҡалдыра. Әҫәр иҫ киткес халыҡсан тел менән ижад ителгән. Ғөмүмән, мин Спартак ағайҙың әҙәби әҫәрҙәрен кинәнеп уҡыған сакта һәр ваҡыт яҙыусы Рамаҙан Өмөтбаевты иҫкә төшөрәм.

Иң тәүҙә ҡыҫҡаса ғына ике әҫәрҙең дә бүреләр тормошона бәйле йөкмәткеһенә туҡталып үтәйек. Күптәребеҙгә күптән билдәле булыуынса, Сыңғыҙ Айтматовтың "Язалау урыны" романының бүре персонаждары Аҡбүре менән Ташсәйнәр Мойонкум ҡурсаулығы биләмәһендә сайғаҡтарға һунар итә. Бүреләр сайғаҡтар көтөүен уратып алыуы була, уларҙың дәғүәсәләре - вертолетта һунарсылар пәйҙә була. Һунарсылар аяуһыҙ рәүештә көҙәләрҙе ҡырырға тотона. Эркелеп сабышыусы сайғаҡтар уларҙың ике көсөгөн тапап үлтерә, өсөнсө көсөктәрен һунарсылар атып ала. Үҙҙәре саҡ-саҡ иҫән ҡалған инә бүре менән ата бүре ҡурсаулыҡты ҡалдырып, ҡамышлыҡҡа барып һыйына һәм уларҙың тағы ла биш көсөгө тыуа. Бер аҙҙан ҡамышлыҡты кешеләр юл төҙөү маҡсатында яндыра һәм бүреләрҙең көсөктәре янып һәләк була. Аҡбүре менән Ташсәйнәр үҙҙәре йәшәй алырлыҡ берҙәнбер төбәккә - Ыҫыҡкүл үҙәненә барып һыйына. Бында уларҙың тағы ла дүрт көсөгө донъяға килә. Еңел табыш артынан ҡыуыусы эскесе Баҙарбай бүре балаларын ояһында тап итә һәм уларҙы ҡиммәт хаҡҡа һатыу өсөн үҙе менән ала. Ҡайтып барышлай ул алдынғы малсы Боҫтондоң тирмәһенә һуғыла. Баҙарбай быныһ менән Боҫтондоң ғаиләһенә фажиғә алып килә. Көсөктәрен алып китеүсенең эҙе буйлап килеүсе бүреләр төндәрен Боҫтондоң тирмәһе янына яҡынлап, көсөктәрен таптырып олорға тотона. Сығырынан сыҡҡан Боҫтон бүреләргә һунар итергә мәжбүр була һәм Ташсәйнәрҙе атып үлтерә. Иҫән ҡалған инә Аҡбүре андып тороп, Боҫтондоң улы Кинйәне елкәһенә һалып алып ҡаса. Боҫтон бүрегә төбәп ата, әммә мылтыҡ йәҙрәһе Аҡбүрене лә, улы Кинйәне лә үлтерә. Боҫтон Баҙарбайҙың йәйләүенә юллана, үҙенең ғаиләһенә фажиғә килтереүҙә сәбәпсе булған гәйепләне атып үлтерә һәм үҙе властарға бирелергә китә. Романдың бүреләргә бәйле йөкмәткеһе ҡыҫҡаса ошолай.

Спартак Ильясовтың "Сағымдағы олоу" бәйәненең төп персонаждары инә бүре Тупыс менән ата бүре Боғаҡ. Тупыс ҡасандыр Күк Һыртлан тигән ата бүре менән ғаилә ҡора, уларҙың өс балаһы ла була. Әммә уларҙың бәхетле көндәре оҙаҡҡа һуҙылмай. Һунарсылар тәүҙә ата бүрене атып үлтерә, аҙаҡ уларҙың эттәре көсөктәрҙе талай. Яңғыҙ ҡалған Тупыс тәбиғи инстинкты буйынса үҙенә иш эҙләй. Ул Боғаҡ менән төндәрен олоу аша бер-береһенә "сәләм хат" ебәрешеп таныша. Бында авторҙың бүреләрҙең тормош үҙенсәлеген, тел-лөғәтен бик яҡшы белеүе күренә. Беҙҙең ҡарамаҡҡа бүреләр нимәгәләр кемгәлер дәғүә йә асыу белдереп олоған һымаҡ ҡына тойолһа ла, ысынында иһә, улар олоған саҡта һөйләшә икән дә. Һәр хәлдә, Тупыс менән Боғаҡ олоу аша бер-береһенә үҙенең енесе һәм танышырға теләүе хаҡында мәғлүмәт еткереүе әҫәрҙә ышанысл итеп һүрәтләнгән. Артабан улар ғаилә ҡора, бергәләп һунарға йөрөй һәм уларҙың өс балаһы тыуа. Инә һәм ата бүре балаларына ашарға аҙыҡ ташыу мәшәҡәте менән йәшәй башлай. Һунарсылар уларҙың да эҙенә төшә. Кешеләрҙең эте үҙаллы һунар итергә өйрәнә башлаған бер бүре көсөгөн талап үлтерә. Бүреләр талаусы эттәрҙе тотоп өҙгөсләй. Бер аҙҙан һунарсыларҙың йәҙрәһе Боғаҡтың йәнен ала. Икенсегә тол ҡалған Тупыс иҫән ҡалған ике көсөгөн иген баҫыуы араһына алып бара, сөнки уға балаларын йәшерерлек башҡа урын ҡалмай. Үҙе балаларын туйындырыу маҡсаты менән тағы ла һунарға сыға. Бер аҙҙан иген баҫыуын комбайндар урырға тотона. Комбайн ураған һайын бәләкәсәйә барған баҫыуҙың һуңғы урамында ситкә ҡасырға маташҡан көсөктәрҙе күреп ҡалған кешеләр тиҙ арала уларҙың да башына етә. Инә бүре һәм көсөктәре кешеләр һәм эттәр тарафынан юҡ ителеп, инде тамам тол һәм үкһеҙ етем ҡалған Тупыс ҡабаттан ғаилә ҡороп ата бүрене эҙләп, оҙаҡ ваҡыт тауҙар һәм урмандар гиҙгәндән һуң, Дуҫбай исемле эт менән дуҫлашырға һәм уның балаларын тыуҙырырға мәжбүр була...

Ике әҫәрҙә лә XX-XXI быуаттар шарттарында тереклектең айырылғыһыҙ өлөшө булған тәбиғәттең ҡырылыуға дусар ителеүе ошо тәбиғәтте үҙенең йәшәү ареалы, йорто итеп тойған бүреләр затын да зат, тереклек төрө булараҡ юҡҡа сығыуға килтереүе һүрәтләнә. Ике әҫәрҙә лә бүреләр яйлап-яйлап урман-тау төпкөлөнән асыҡ урынға ҡыуылып, сигенә-сигенә килеп, ғаиләләрен юғалтып бөтөү, юғалыу сигенә килтереп баҫтырыла. Спартак Ильясов Сыңғыҙ Айтматовтың "Язалау урыны" романын уҡымаған, унда барған ваҡиғаларҙы бөтөнләй белмәй, әммә тәбиғәттең, тереклектең юҡҡа сыға барыуы Ыҫыҡкүл буйында ла, Урал тауҙарында ла бер үк икәне иҫбат ителә бында. Бөтә урында ла бүреләрҙе бер үк яҙмыш эҙәрлекләй икән. Хәйер, бүреләрҙе генәме икән?

"Сағымдағы олоу" бәйәне был йәһәттән "Язалау урыны"нан күпкә айырыла. Сыңғыҙ Айтматов әҫәрендә бүреләр кешеләр янындағы, уларҙың балаларын алып китеүсе дүрт аяҡлы йыртҡыс йән эйәләре генә булһа, Спартак Ильясовтың бүреләре цивилизация, глобаллашыу шарттарындағы тотош халыҡтың, милләттең йәшәйешен күҙ алдына баҫтырыусылар. Автор бүреләр тормошон төрлө шарттарҙа бәйән итеп, уларҙың, асылда, бүре генә булмауҙарын да иҫбатлай. Бүренең йыртҡыслығын да автор бына нисек итеп аҡлай:

"...һәр йән йәшәргә хоҡуҡлы, йәшәр өсөн ашарға хоҡуҡлы. Ә ризыҡтың аҡҡан ғүмер өсөн нисек табылыуы мөһим түгел, һәр йән эйәһе тәбиғәт тарафынан үҙенә тәғәйен ризыҡын үҙ алымы, үҙ ысулы менән таба. Ашамай икән, уға йәшәү юҡ. Бүренән гәйре йыртҡыс, әхлаҡһыҙ, барлыҡ ғәмәле тик үҙенән аҡылһыҙы отоу, алдау, йәберләү, урлау һәм уларҙан башҡа әллә нисә төр тәбиғи енәйәткә сумған кеше өсөн бүренең ашарға теләүе йыртҡыслыҡ тип атала..."

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар.)**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔12 майҙа Рәсәйҙә Милли урман ултыртыу көнө үтәсәк, унда теләгән һәр кем ҡатнаша ала. Урмандарҙы һаҡлау мәсьәләһенә йәмәғәтселек иғтибарын йәлеп итеү бөтә Рәсәй "урман" көнөнөң төп бурысы булып тора. Былтыр 14 майҙа үткәрелгән Милли урман ултыртыу көнөндә Башҡортостанда һәр урман хужалығында тиерлек 500-әр үҫенте ултыртылды. Дөйөм алғанда, Башҡортостан урмандары 15 меңдән ашыу ағасҡа тулыланды.

✔Башҡорт дәүләт университеты 21 апрелдә Асыҡ ишектәр көнө үткәрә. Был юлы буласаҡ абитуриенттар юғары уҡыу йорто факультеттарының эшмәкәрлеге менән таныша аласаҡ. Башлана 12 сәғәттә. Белешмәләр өсөн телефон: (347) 273-67-08.

✔Башҡортостан аграрийҙары яҙғы иген культураларын сәсеүгә сыҡты. Тәүгеләрҙән булып Мәләүез, Ҡыйғы һәм Миәкә, Әлшәй, Архангел, Ауырғазы, Бүздәк, Ейәнсура, Илеш, Күгәрсен, Көйөргәҙе һәм Саҡмағош райондары сәсеү агрегаттарын баҫыуға сығарҙы. Апрель өсөн аномаль юғары температураны иҫәпкә алып, аграр ведомство 1 майға тиклем дым ҡаплауҙы тамамлау бурысын ҡуя. Әле тырматыу эштәре ҡараңғы төшкәнсе алып барыла. Сәсеүҙе игенселәр ике сменала - тәүлек әйләнәһенә алып барырға планлаштыра.

✔Еңеү көнө алдынан Башҡортостанда бер юлы ике - "Георгий таҫмаһы" һәм "1941-1945-те иҫләйбеҙ!" акциялары үткәреләсәк. "Георгий таҫмаһы" тәүгә республикала 2005 йылда ойошторолдо. Әлеге ваҡытта иҫтәлекле таҫмалар алыуға һәм уларҙы Башҡортостандың ҡала һәм райондары буйлап таратыуға средстволар йыйыла. "1941-1945 - те иҫләйбеҙ!" акцияһы сиктәрендә 29 апрелдә Өфөнөң "Нефтсе" мәҙәниәт һарайында Александров исемендәге Рәсәй армияһы йыр һәм бейеү ансамбле сығыш яһаясаҡ.

✔Башҡортостандың "Тәбиғәт" дәүләт унитар предприятиеһы 21 апрелдә "Минең ҡалам - минең йортом" экологик акцияһы сиктәрендә Өфөлә энергия һаҡлаусы лампалар йыйыуҙы ойоштора. Һәр өфөлө иҫке лампаларын бушлай тапшыра ала. Бының өсөн уларҙы Якутов исемендәге паркка, "Ҡашҡаҙан"ға йәки "Искра" кинокомплексы алдындағы майҙанға алып килергә кәрәк. Акция 14 сәғәттән 15.30 сәғәткә тиклем үтәсәк.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Ҡорҙа кемдер: "Һыуҙы ҙур шешәләр менән өйҙәргә ташыу хеҙмәте яйға һалынған, ә ни өсөн ҡымыҙҙы ла шулай тарата башламаҫҡа?" тигән фекер "еме" ырғытты. Тимәк, бизнесын асырға теләгән милләттәштәр өсөн идеялар бихисап.*



*ӨФӨ ҠУНАҒЫ*

# ТУҒАНДАШЛЫҠ...
## хеҙмәттәшлеккә килтерер

**"Тамыр" балалар телеканалының 20 йыллыҡ юбилейына килгән ҡунаҡ - "Ҡаҙағстан" телерадиокорпорацияһы рәйесе урынбаҫары Мади Манатбәк улы САПАРОВ һөйләй:**

- Ҡаҙағстан республикаһында телевидение дәүләт сәйәсәте менән бер йүнәлештә үҫешә. Беҙҙә туған телде һаҡлауға, уны үҫтереүгә ҙур иғтибар бүленә. Телде сәңгелдәктә ятҡанда, аң белә башлағандан алып өйрәнеү, ошо мөхиттә үҫеү ҙурайғас өйрәнгәнгә ҡарағанда күпкә еңелерәк һәм файҙалыраҡ. Ошо күҙаллауҙарҙан сығып, ике йыл элек беҙ дәүләт кимәлендә тулыһынса туған ҡаҙаҡ телендә тапшырыуҙар алып барған балалар өсөн махсус "Балапан" каналы ойоштorҙоҡ. Алып барыусыны экран алдына ултыртып ҡуйып, берәй ҡунаҡ менән әңгәмә ҡороу ғына артыҡ ҡыҙыҡлы түгел. Тапшырыуҙар фәһемле һәм файҙалы булырға тейеш. Ошоно күҙ уңында тотоп, эфирҙы йәнле тапшырыуҙар, туған телдәге сериалдар, йәнһүрәттәр менән тултырҙыҡ. Маҡсатыбыҙ - Рәсәй кимәленән ҡалышмаған, унын менән конкурентлыҡ итә алған сифатлы канал эшләү. Шул уҡ ваҡытта сит илдәр тәжрибәһен үҙләштереү ҙә мөһим, ләкин милли йөҙөбөҙҙө һаҡлап ҡалыу тағы ла мөһимерәк. Элек балаларыбыҙ сит ил балалар каналдарын ҡараһа, хәҙер уларға туған телебеҙҙәге каналды ҡарау мөмкинлеге бирәбеҙ. Һәм, ысынлап та, каналдың рейтингы юғары, балалар аудиторияһы ҡуш ҡуллап пульт төймәһе менән беҙҙең каналды һайлай.

Туған телдә балалар каналы булыуының файҙалы яҡтары күп. Мәҫәлән, беҙ ата-әсәләребеҙҙең, өләсәйҙәребеҙҙең һөйләүенән ишетеп-белеп үҫкән әкиәттәрҙе балаларыбыҙ телеэкрандарҙа күрә. Халыҡ ижады телмәрҙән ситкә киткән дәүерҙә экрандар аша уны балаларға еткереү уларҙың рухи яҡтан үҫеүенә йоғонто яһамай ҡалмай. Телде халыҡҡа күндереү өсөн дә был һөҙөмтәле юл. Телде мотлаҡ белеү кәрәк, тигән указдар сығарып, халыҡты телде өйрәнеүгә ултыртып ҡуйып булмай. Балалар телевидениеһындағы ҡаҙаҡ телендәге тапшырыуҙар, сериалдар, йәнһүрәттәр аша тамашасы, үҙе лә һиҙмәҫтән, туған телгә ылыға. Һуңғы арала канал тәржемә ителгән фильмдар, сериалдар менән генә туҡтап ҡалмайынса, әүҙем рәүештә продакш студияларға үҙебеҙҙең етештереүҙәге продукттарға заказдар бирә.

Төрки халыҡтар менән хеҙмәттәшлек итеү, киләсәктә уртаҡ проекттар эшләү ҙә күҙ уңында тотола. Мәҫәлән, Төркиә беҙгә балалар өсөн сериалдар эшләргә заказ бирә. Шулай уҡ беҙ ҙә уларға заказдар бирәбеҙ. Был мөһим, сөнки тәжрибә уртаҡлашыу, бер ҡаҙанда ҡайнау, бер йүнәлештә хеҙмәт итеү өҫтәмә дәрт һәм мөмкинлектәр бирә.

Ишетеп белһәм дә, быға тиклем Башҡортостанда булғаным юҡ ине. Бында мин туғандаш халыҡты күрҙем. Беҙ бер-беребеҙгә йөҙөбөҙ менән генә түгел, телебеҙ менән дә, ҡайһы бер кимәлдә мәҙәниәтебеҙ менән дә ныҡ оҡшағанбыҙ. Бер-беребеҙҙе тәржемәсеһеҙ аңлайбыҙ. Һәм ошо туғандашлыҡ хеҙмәттәшлегебеҙҙең нигеҙе булып торор, тип ышанып ҡалам. Киләсәктә "Тамыр" менән дә хеҙмәттәшлек итергә планлаштырабыҙ. Һәм был юҫыҡта ла үҫеш мотлаҡ булыр.

**Азамат ӘБҮТАЛИПОВ яҙып алды.**

*ҮӘТ МӘСЬӘЛӘ!*

**Башҡортомдоң милли эсемлеге булған ҡымыҙ бөгөн дә туҡланыу рационыбыҙҙа урын биләйме? Уны етештереү эштәре нисегерәк тормошҡа атҡарыла? Ҡымыҙ менән дауалау һанға һуғыламы? Ғөмүмән, Башҡортостан Республикаһында ҡымыҙ етештереү һәм уны таратыу индустрияһы яйға һалынғанмы? Ошо һәм башҡа һорауҙарға яуаптарҙы беҙ күптән түгел БР Ауыл хужалығы министрлығында үткәрелгән түңәрәк ҡорҙағы һөйләшеүҙәрҙә ишеттек.**



# ҠЫМЫҘҘЫ ЛА...
## өйгә килтерергә булмаймы?

Ҡорҙо асып, ауыл хужалығы министрының беренсе урынбаҫары Азат Йыһаншин һүҙ алды: "Башҡорт ҡымыҙын бренд тип һанаһаҡ та, уны етерлек кимәлдә ҡулланмайбыҙ әле, - тине ул.- Сөнки йылҡысылыҡ тармағының айырылғыһыҙ өлөшө булған бейә һөтөнән төрлө продукттар, шул иҫәптән милли эсемлегебеҙ - ҡымыҙ етештереү һәм уны ҡулланыуҙы яйға һалыуға етерлек иғтибар биреп еткермәйбеҙ. Ҡымыҙҙың шифаһы тураһында аҙ һөйләйбеҙ. Тулайым ҡымыҙ етештереүҙе тулы ҡеүәтенә эшләтеү - мөмкин һәм кәрәк булған эш. Сығымдарҙы яҡынса иҫәпләгәндә лә, ҡымыҙ етештереүҙе бер-нисә тапҡырға арттырырға мөмкинлек бар, әммә хәл итеүҙе талап иткән ҡайһы бер мәсьәләләр арҡаһында, ҡымыҙ етештереү һәм уны һатыу бары 10 процент кимәлендә генә тормошҡа ашырыла..."

Билдәләнеүенсә, беҙҙең республикала 53 мең бейә малы иҫәпләнә һәм йылына бары тик 3 мең тонна ҡымыҙ етештерелә, ысынында, ҡара иҫәп менән генә лә бер бейәнән йылына 600 литрҙан ашыу сихәтле ҡымыҙ етештерергә була. Ауыл хужалығы предприятиелары үҙҙәре етештергән ҡымыҙҙы һатыуҙы ойоштора алмай - был уларға ошо шифалы эсемлекте етештереү мәсьәләһенә йөҙ менән боролорға ҡамасаулай. Исмаһам, Башҡортостандағы һауыҡтырыу учреждениеларында ҡымыҙ менән дауалауға етди иғтибар бирелһен ине, ти улар.

Ысынлап та, хәл итәһе мәсьәләләр бар. Шуға ла быйыл март айында ҡымыҙ етештереү буйынса уҙған ултырышта төрлө ведомство вәкилдәрен туплаған эшлекле төркөм ойошторолған. Төркөмдөң етәксеһе иҡтисад фәндәре докторы, профессор Николай Бубли әйтеүенсә, ҡымыҙ тигән бик файҙалы, сихәтле эсемлектең иҫ китерлек дауалау көсө тураһында ҡулланыусы яҡшы белһен өсөн маркетинг, реклама ысулдарын да белеп ҡулланыу талап ителә. Түңәрәк өҫтәлдә ҡатнашыусылар был фекерҙе хупланы. Медицина фәндәре докторы профессор Ираида Әхәтова иһә ҡымыҙ менән дауалау буйынса яңы һәм ентекле тикшеренеүҙәр үткәрергә кәрәклеген билдәләне. "Ҡымыҙ менән һауығыу ҡайһылай һәйбәт", тип кенә мәсьәләне хәл итеп булмаясаҡ, бюджеттан ярҙам булырға тейеш", - тине ул. Медицина фәндәре докторы, профессор Лира Ғилметдинова ҡымыҙ буйынса фәнни тикшеренеүҙәр барышы менән таныштырҙы. Билдәләнеүенсә, Һаулыҡ һаҡлау министрлығы һәм БДМУ нигеҙендә ҡымыҙ менән дауалау буйынса киң ҡоласлы тикшеренеүҙәр уҙғарылған, ҡымыҙҙың һәм бейә һөтөнөң кеше һаулығын нығытыуға килтергән файҙаһы иҫбатланған. Мәҫәлән, бейә һөтө һәм ҡымыҙ сирләү ихтималлығын 3-5 тапҡырға кәметә. Шулай уҡ ҡымыҙҙың һәм бейә һөтөнөң үпкә һәм тын алыу юлдары ауырыуҙарын ғына түгел, ә йөрәк-ҡан тамырҙары менән сирле кешеләргә лә һауыҡтырғыс тәьҫир итеүе иҫбатланған.

Түңәрәк ҡорға шифаханалар директорҙары ла, ҡымыҙ етештереү, йылҡысылыҡ менән шөғөлләнгән компаниялар директорҙары ла саҡырылғайны. Улар ҙа үҙҙәренең эшмәкәрлеге менән таныштырҙы. "Йоматау" шифаханаһы, мәҫәлән, үҙенүҙе ҡымыҙ менән тәьмин итә ала, бының өсөн шифахана янында ферма эшләй. "Йоматау"ҙа ҡымыҙҙы онға әйләндереү аппараты ла ҡуйылған. Шунлыҡтан, сихәтле ҡымыҙҙы һауындар ваҡытында ғына түгел, ә йыл әйләнәһенә ҡулланыу мөмкинлеге булдырылған. Башҡа шифаханаларға ла ошо миҫалды өлгө итеп алырға тәҡдим ителде.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ҡымыҙҙы, тоҡомло йылҡысылыҡты үҫтереү маҡсатында йыйылған түңәрәк ҡор тағы ла бихисап һорауҙарға яуап таба алды һәм киләсәктә лә табыр, сөнки һөйләшеүҙәр был түңәрәк ҡор сиктәре менән генә сикләнмәйәсәк, тинеләр. Ҡорҙа кемдер: "Һыуҙы ҙур шешәләр менән өйҙәргә ташыу хеҙмәте яйға һалынған, ә ни өсөн ҡымыҙҙы ла шулай тарата башламаҫҡа?" тигән фекер "еме" ырғытты. Тимәк, үҫергә, бизнесын асырға теләгән милләттәштәр өсөн идеялар бихисап.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

*ЯҢЫ БӘЙГЕ!*

# АЛТЫН ҒЫНА ЙӘШТӘҺЕҢМЕ?
## Бәйгелә ҡатнаш, әйҙә!

**Өфө ҡала округында "Алтын йәштәге таланттар" тип аталған смотр-конкурс үткәреләсәк.**

Унда Өфө ҡалаһында йәшәгән пенсионерҙар (ҡатындарҙың йәше - 55-тән, ирҙәрҙеке 60 йәштән оло булырға тейеш), оло йәштәге кешеләрҙән төҙөлгән үҙешмәкәр коллективтар ҡатнаша ала. Смотр-конкурстың маҡсаты: киң йәмәғәтселек иғтибарын оло йәштәге үҙешмәкәр коллективтарға йүнәлтеү; оло йәштәге граждандарҙың ижади һәләттәрен үҫтерергә ярҙам итеү; бының өсөн уларға шарттар тыуҙырыу; оло йәштәге граждандар араһында әүҙем тормош позицияһын булдырыу; уларҙың ялын ойоштороу.

Смотр-конкурста ҡатнашырға теләүсе һәр коллектив һәм айырым башҡарыусылар 5 минуттан да оҙайлы булмаған бер әҫәр әҙерләй. Репертуарҙы ҡатнашыусылар үҙҙәре һайлай. Смотр-конкурс программаһына профессиональ, шулай уҡ үҙешмәкәр авторҙарҙың әҫәрҙәре инә ала. Улар түбәндәге жанрҙарҙа булырға тейеш: вокал соло (эстрада, халыҡ, академик, автор йыры); халыҡ йәки академик йүнәлештәге хор; ошо уҡ йүнәлештәге ансамбль сығышы; художестволы һүҙ; инструменталь башҡарыу. Музыкаль оҙатыу, техник йыһазландырыу мәсьәләләре ҡатнашыусылар тарафынан үҙаллы хәл ителә.

Смотр-конкурс буйынса өҫтәмә мәғлүмәтте Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 114/1 адресы буйынса йәки 235-98-54 номерына шылтыратып белешергә кәрәк. social@ufacity.info

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә "Үҙ ағасыңды ултырт" акцияһы старт алды. Бөтә Рәсәй акцияһында ҡатнашырға теләгән һәр кемгә үҫентеләр һәм уларҙы ултыртыу өсөн кәрәкле инструменттар биреләсәк. Бының өсөн Өфө ҡалаһы, Урман тыҡрығы, 1 адресы буйынса урынлашҡан Өфө урман хужалығына килергә кәрәк. Телефондар: (347) 241-49-44, 232-88-32.

✓3 майҙа Өфөлә "Дача миҙгеле. Яҙ" III махсуслаштырылған күргәҙмәйәрминкәһе асыла. "Йәштәр һарайы" алдындағы майҙанда Йәрминкәлә Башҡортостандың, шулай уҡ яҡын-тирәләге төбәктәрҙең тәжрибә хужалыҡтары һәм емеш совхоздары ҡатнашасаҡ. Күргәҙмә-йәрминкәнең төп үҙенсәлеге - бында килгәндәр Башҡорт дәүләт аграр университеты белгестәренән консультация ала аласаҡ.

✓Башҡортостан Хөкүмәте "Һөт малсылығын үҫтереү һәм һөт етештереүҙе арттырыу. Башҡортостан Республикаһында 500 һөтсөлөк-тауар фермаһын комплекслы яңыртыу" программаһын раҫланы. Биш йылға иҫәпләнгән был программа буйынса ошо арала 500 һөтсөлөк-тауар фермаһы яңыртыласаҡ һәм реконструкцияланасаҡ, тағы 6 яңы һөтсөлөк комплексы төҙөләсәк. Ауыл хужалығы ойошмаларында хеҙмәт етештереүсәнлеге кәм тигәндә 25 процентҡа артасаҡ, тип көтөлә. Быға өҫтәп, республикала тоҡомсолоҡ эше буйынса алты сервис хеҙмәте булдырыласаҡ.

✓Май байрамдары ваҡытында Рәсәй халҡына рәттән өс шәмбе эшләргә тура киләсәк. Шәмбе 28 апрелдән 30 апрелгә, шәмбе 5 майҙан 7 майға һәм шәмбе 12 майҙан 8 майға күсерелә, тип хәбәр иттеләр БР Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының матбуғат хеҙмәтендә. Тимәк, Башҡортостан халҡы, бөтә рәсәйлеләр кеүек үк, рәттән өс шәмбе эшләйәсәк. Байрамдар уңайынан 29, 30 апрель, 1 май һәм 6, 7, 8, 9 май Башҡортостанда ял көндәре буласаҡ.

✓Башҡортостан быйыл да Европа иммунлаштырыу аҙналығында ҡатнашасаҡ, ул Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһының Европа бюроһы инициативаһы менән 21 - 27 апрелдә үткәрелә. Европа иммунлаштырыу аҙналығы дауамында республикала прививкалар эшләтеүҙең мөһимлеге, ауырыуҙарҙы иҫкәртеү тураһында мәғлүмәт таратыу эштәре йәйелдереләсәк.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ШӘЖӘРӘЛӘ...

## тарих йәшәй

**Шәжәрә байрамдарын үткәреү ауылдарҙа ғына түгел, ҡалаларҙа ла ғәҙәти күренешкә әйләнде. Өфөнөң Орджоникидзе районында ла был сара бына инде бер нисә йыл рәттән уҙғарыла килә.**



Ҡала районы кимәлендә үткәрелгән Шәжәрә байрамына нигеҙҙә мәғариф учреждениелары йәлеп ителә. Шуға ла ҡатнашыусылар араһында айырыуса уҡыусылар күп була. Был юлы ла ғаилә шәжәрәләрен балалар тәҡдим итте. Һәр кем шәжәрәһен сағыуыраҡ, матурыраҡ итеп күрһәтергә тырышты.

Художестволы лицей уҡыусыһы Тимур Әйүпов шәжәрәһен әсәһе ярҙамында өйрәнә. Әйүпов фамилияһы тарихын асыҡлар өсөн улар бергәләп архив материалдарын күтәрә, тыуған яҡтары Бүздәк районынан мәғлүмәттәр туплай. "Нәҫелебеҙ 1578 йылдан башлана, тип асыҡланыҡ, - тип һөйләй Тимур. - Тамыры Мирас мырҙаға барып тоташа. Әйүповтар - ҡаңлы ырыуы башҡорттарына ҡарай. Шул ырыуҙан ҡаңлы-төркәй ҡәбиләһе бүленеп сыға. Хәҙерге Ҡаңлы-Төркәй ауылы эргәһендә ике бер туған олатайым Ҡаранай менән Дәүләткилде Ҡаранай ауылына нигеҙ һала". Байтаҡ мәғлүмәттәрҙе өләсәләренән ишетеп белә Әйүповтар. Тимурҙың әсәһе Шәүрә Әйүпова йәш сағынан үҙ шәжәрәһе менән ҡыҙыҡһына. "Ҡыҙ фамилиям - Яубаҫарова, - ти ул.- Сығышым менән Ейәнсура районынан үҫәргән ырыуынанмын. Беҙҙең нәҫел тамырҙары ла бик тәрән. Үҫәргәндәр составында ата-бабаларыбыҙ ҡаҙаҡ ырыуҙарына ҡаршы һуғышҡаны билдәле. Шулай уҡ туғандарыбыҙҙың береһе 1812 йылғы Ватан һғышында ҡатнашып Парижға барып еткәнен, көмөш миҙал менән бүләкләнгәнен беләбеҙ. Хәҙер балаларыбыҙ ҙа шәжәрәне бик ҡыҙыҡһынып өйрәнә. Башҡорт булыуҙары менән ғорурланалар..."

Ишморатовтар байрамға бөтә ғаилә менән килгән. Ҡыҙҙары исеменән тәҡдим итә улар үҙ шәжәрәһен. Башҡорт лицейы уҡыусыһы Әлиә нәҫелен 19 быуынға тиклем белә. Тамыры 15-се быуат аҙағында - 16-сы быуат башында ғүмер иткән Аҡкейек исемле олатаһына барып тоташа. Ә нәҫеле Баймаҡ районы Ишмырҙа ауылында киң тарала. Әлиә Бөйөк Ватан һуғышында 112-се башҡорт кавалерия дивизияһы составында яу юлын үткән олатаһы менән ғорурлана. Ул үҙе ҡумыҙҙа уйнай. Туған телендә матур аралаша. Әсәһе Гөлгөнә Ишморатова әйтмешләй, ҡала шарттарында ла бала туған телендә иркен һөйләшә ала. Бының сере ябай. Ишморатовтар ғаиләһендә тик башҡорт теле яңғырай.

Тәнзилә Хәйруллина балалар баҡсаһында тәрбиәсе булып эшләй. Сығышы менән - Ғафури районы Һабай ауылынан. Атаһы яғынан килгән Хәбибуллиндар нәҫел-нәсәбен өйрәнеп, архив материалдарын ентекле тикшерә. "Атайым да белгәндәре менән бүлешә торғайны. Ул һөйләгәндәр ысынлап та дөрөҫ булып сыҡты. Тәүге тапҡыр Шәжәрә байрамында ҡатнашҡанда быуын сылбырын атайым һүҙҙәренә нигеҙләнеп кенә төҙөгәйнем. Шул шәжәрәне был сараға ла бер төҙәтеү индермәй, архив документтары менән дәлилләп, алып килдем", - тип һөйләй ул. Тәнзилә Ғәли ҡыҙы шәжәрә өйрәнеү буйынса балалар өсөн "Үҙ ғаиләм тарихы" тигән брошюра сығарған. Унда шәжәрә өйрәнеү серҙәре асыла. Брошюра балаларға, ата-әсәләргә таратыла.

Шәжәрә байрамы - үҙ нәҫелеңде генә барлау түгел. Ул яҡын кешеләрҙең, туғандарҙың бергә йыйылып алыу мөмкинлеге лә. Сарала ана шул туғанлыҡ ептәренең нығыныуы һиҙелде.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Баһалама ағзаһы Әлфиә Йосопова әйтеүенсә, ҡатнашыусылар Шәжәрә байрамына йылдан-йыл етдиерәк әҙерләнеп килә башлаған. Сифат менән генә түгел, ҡатнашыусылар һаны менән дә камиллаша бара был икән сара. Элек унда ҡатнашыуға мәктәптәр, балалар баҡсалары ғына теләк белдереһә, хәҙер дауаханалар, башҡа предприятиелар ҙа ҡушылған. Тимәк, был байрам үҙенең кәрәклеген раҫлай бара.**

**Мәһәҙи МОРАТОВ.**

ТУҠТА, МӘЛ!

## БЕР ЙЫЛЫ ҺҮҘ ЕТӘ...

**Республикабыҙҙың бар тарафтарынан, төрлө милләт ҡатын-ҡыҙҙары Өфөгә, Башҡортостан Республикаһы Ҡатын-ҡыҙҙар союзы ойошторолоуҙың 25 йыллығын байрам итергә йыйылды. Гүзәл заттарҙы ҡотланылар, бүләкләнеләр, сәхнәгә күтәрелгән ир-егеттәр иһә ireп китерлек маҡтау һүҙҙәрен йәлләмәне. Түбәндә ошо сарала фотохәбәрсебеҙ төшөрөп алған бер нисә фотокүренеш.**













## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

### Балан



**Баландың тамыры ла, йәш ботаҡтары ла, сәскәһе-япрағы ла, хатта киптерелгән һөйәктәре лә файҙалы.**

❖ Көҙ япрағын күпләп киптереп, ҡыш буйына һыуҙа бешекләп, ваннала йыуынаһың - ҡан баҫымын көйләй, тирене һығылмалы итә; ❖ киптереп алған төштәрен һоро төҫкә ингәнсе ҡыҙҙырып ваҡлап, кофе итеп эсәһең; ❖ баланды һөйәге менән бергә ашаһаң, йөрәк эшмәкәрлеген яҡшырта, шешенеүҙән ҡотҡара; ❖ баландың һөйәген даими рәүештә, берәмләп, көнөнә 10-15 бөртөгөн йотоп өйрәнһәң, үт ҡыуығындағы, бауыр юлдарындағы ҡом һәм таштарҙы юҡҡа сығара; ❖ балан һөйәге - организмдан шлактарҙы сығарыусы, эсәк мускулдарын нығытыусы тәбиғи дауа ул. Балан һөйәге һуҡыр эсәккә инмәй; ❖ киптерелгән балан һөйәген онтаҡлап шәкәргә болғап та, бәлеш итеп ашау ҙа файҙалы; ❖ эсе киткән кешегә йәш ботаҡ ҡайырыһын, сәскәһен ҡайнатып эсереү файҙалы; ❖ бала диатез менән яфаланһа, бөрөһө менән бергә йәш ботаҡты киҫкеләп, кәстрүлдең 3/4 өлөшөнә тултырып, һыу ҡойоп, 3-4 сәғәт талғын утҡа духовкаға ҡуйырға. Һөҙөргә, ҡара төҫтәге шешәләргә тултырып, һалҡынға ҡуйырға. Балаға көнөнә 3 мәртәбә - иртәнге ашҡа тиклем 2 сәғәт элек, төшкө аштан һуң 2 сәғәт үткәс, киске ашты ашағас 1,5 сәғәт үткәс 1-әр балғалаҡ эсерергә; ❖ гастрит йәки ашҡаҙандың әселеге юғары булғанда 1 ҡалаҡ балан сәскәһенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, ябыҡ һауытта 2-3 минут ҡайнатырға. Һөҙөргә, көнөнә 3 мәртәбә 1 ҡалаҡ эсергә; ❖ һалҡын тейгәндә, ҡурылдай (бронхит) булғанда, ҡаты йүтәлдә, тауыш ҡарлыҡҡанда 1 ҡалаҡ баланға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм 2-3 сәғәткә төрөп ултыртырға. Бал менән тәмләтеп, йылымыс көйө көнөнә 3-4 мәртәбә стакандың өстән бер өлөшө күләмендә эсергә; күҙ тейеүҙән һаҡлау өсөн һыйыр һауған биҙрәнең ҡолағына бармаҡ буйы балан ботағын киртләп бәйләү, йәш баланың башлығына мәрйен кеүек теҙеп тегеп ҡуйыу ҙа борондан килгән йола.

Шулай уҡ баланды йыйғас, һыуыҡ һыу менән сайып, берәмләп 1,5-2 литрлы пластик шешәләргә тултырам, ыңғайына Хоҙайға зекер әйтәм. Аҙаҡ йә күстәнәс, йә саҙаҡа итеп бирәм, эстән генә, шешәлә нисә балан бар, шул һанса әрүахҡа хәйер-саҙаҡа булһын, Хоҙай рухшәрифтәренә еткереп шатландырһын, миңә сауабын насип итһен, тип теләйем.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*✓ Совет йылдарында башҡорттоң үҙенең тарихын белергә ынтылыуы һәр саҡ шик аҫтына алынып, был ынтылыш милләтселек тип аңлатылып килгәнгә күрә, беҙҙә үҙ-үҙеңде һаҡлау комплексы формалашты.*



БӘХӘС ҠОРО

# ҺӘР БЕР МИЛЛӘТ...

## үҙ тарихын үҙе яҙырға тейеш түгелме ни?



**Ошо көндәрҙә Башҡортостан Фәндәр академияһы республиканың танылған тарихсыларын, философтарын һәм политологтарын йыйып, "Башҡортостан Республикаһында тарих фәненең хәҙерге торошо һәм методологик проблемалары" тигән темаға түңәрәк ҡор үткәрҙе.**

Бындай йыйылыш үткәреүгә дүрт профессиональ тарихсының (Г.Обыденнова, В.Иванов, Б.Аҙнабаев, Р.Рәхимов) республика Президенты Рөстәм Хәмитовҡа мөрәжәғәте сәбәпсе булды. Был дүрт тарихсы республикала тарих фәне торошо менән "борсолоуын" белдереп, килеп тыуған хәүефле күренештең сәбәптәрен асыҡларға тырыша һәм республика башлығынан сара күреүҙе үтенә. Ҡыҫҡа ғына итеп әйткәндә, был авторҙар фекеренсә, Нияз Мәжитов, Нәзир Ҡолбахтин, Ирек Аҡманов, Марат Ҡолшәрипов кеүек тарих фәне ғалимдары республиканың тарих фәненә үҫергә ҡамасаулай.

Археолог Владимир Иванов, мәҫәлән, ғәйептең иң тос өлөшөн академик Нияз Мәжитовҡа ташлай. Йәнәһе лә, Н. Мәжитов "Башҡорт" тигән ҙур ҡаланың урынын таптыҡ", тигән дөрөҫлөккә бигүк тап килмәгән ялған мәғлүмәттәр таратып, йәмәғәтселектә башҡорт тарихына ҡарата яңылыш фекер формалаштыра. Владимир Ивановтың ошо сығышын тыңлаған саҡта "Хәҙер инде урамда егерме беренсе быуат, ә башҡорт халҡына ҡарата мөнәсәбәт һаман үҙгәрмәй", тигән һыҙланыу барлыҡҡа килде. Башҡорттоң үҙ тарихын үҙе аңлағанса яҙырға теләүе ҡайһы берәүҙәрҙә шикшөбһә, ә ҡайһы берәүҙәрендә хатта нәфрәт тә уята. Бер тарихсы ете томлы "Башҡорт халҡы тарихы" яҙыласаҡты ишеткәс, "Башҡорттарға ундай ҙур тарих китабы яҙыу әле иртәрәк", тип бик ярһығайны. Әммә шул уҡ тарихсы баяғы тарихтың бер өлөшөн яҙырға тәҡдим иткәстәр, бының өсөн мул ғына түләйәсәктәрен ишеткәс, ҡушҡуллап ризалашты, ә инде аҡсаһын алғас, бик ҡыуанып ултырғанына үҙем шаһитмын. Боронғо Рим императоры Веспасиандың "Аҡсаның еҫе юҡ", тигәне иҫкә төшә ошондай кешеләр менән осрашырға тура килгәндә...

Тарих ҡабатлана, тигән бер хәҡиҡәт бар. Ҡасандыр бынан бер нисә быуат элек немецтар "Урыҫтар бер нәмәгә лә һәләтле түгел, уларға дәүләтте лә, фәнде лә, ғөмүмән, цивилизацияны беҙ килтерҙек", - тигән "Норман теорияһына" нигеҙ һала. Был теория ваҡыт-ваҡыты менән әле онотолоп, йә кире ҡалҡып сығып, урыҫ тарихсыларының кәйефен боҙғолап тора. Ҡайһы бер ғалимдар ошо уҡ алымды башҡорт халҡына ҡарата ҡулланыуҙан тартынмай. Йәнәһе лә, быуаттар буйына тик мал ғына көтөп йөрөгән башҡорттар был донъяла башҡа бер нәмәгә һәләтле түгел, уларҙың мәҙәниәте лә, шул иҫәптән ҡалалары ла булмаған. Уларҙың бөтә тормош-көнкүреше, мәҙәниәте тик дала күсмәндәре менән бәйле булған. Хат авторҙарының береһе (БДУ доценты Р.Н.Рәхимов): "Башҡорттоң бөтөн аш-һыуы, йыр-моңо, бейеүе, фольклоры, ғөмүмән, бөтөн мәҙәниәте дала күсмәндәре менән бәйле. Унда ҡалалар тураһында бер нәмә лә әйтелмәгән. Әгәр беҙ башҡорттоң борон ҡалалары булғанлығын таныһаҡ, тимәк, беҙ башҡорт тарихын бөтөнләй икенсе төрлө аңларға тейеш буласаҡбыҙ, ә был - концепцияны кире ҡарап сығыуҙы һәм башҡорттоң тарихын бөтөнләй икенсе төрлө юҫыҡта, быға саҡлы яҙылғандарҙың күбеһенән баш тартып яҙырға тейеш буласаҡбыҙ бит", - тип ысҡындырҙы. Ысынында, беҙҙең халыҡтың аяныс үткәнен, михнәтле яҙмышын аңларға теләүҙән әйтелмәгәндер был һүҙҙәр. Ҡасандыр Карл Маркс: "Донъяла беҙ тик бер фәнде, тарих фәнен генә беләбеҙ", - тигән. Тарих - ул идеология һәм бик ҙур көс. Халҡының үткәнен белгән кеше уның ихтыяждарын, уға нимә кәрәк икәнен дә аңлап, үҙ халҡы мәнфәғәттәренән сығып эш итәсәк һәм ул мәнфәғәттәрҙе һәр саҡ алға ҡуясаҡ. Быны башҡортҡа ҡаршы көстәр яҡшы аңлай һәм тарихыбыҙҙы боҙоп күрһәтеп, халыҡтың башын бутарға ынтыла. Үткәнен белмәгән халыҡтың киләсәге лә юҡ бит.

Ваҡыт тигән нәмә аяуһыҙ бер сифатҡа эйә. Ул бөтә нәмәне лә оноттора ала. Ҡасандыр бөйөк цивилизация ҡорған майя халҡы испандар тарафынан баҫып алынып, уларҙың бөйөк мәҙәниәте юҡ ителә. Ҡалалары емертелә, тарих яҙылған китаптары утҡа ташлана. Майя халҡының тере ҡалғандары испандарҙан күргән вәхшилеккә иҫаҡылы китеп, ҡоттары осоп ҡасып, джунглиҙар араһына инеп боҫа, унда еңел генә өйҙәрҙә көн итә башлай. Күп ваҡыт та үтмәй, ошо майяларҙың вариҫтары үҙҙәренең тарихын онота. Дөрөҫөрәге, уларҙы онотторға мәжбүр итәләр. Боронғо ҡалаларҙы тропик урман баҫып китә. Әйтерһең дә, тәбиғәт үҙе үк испандар ҡылған вәхшилектәрҙе онотторға ынтыла. Ҡала бинагары урынында тик билдәһеҙ убалар ҡалҡып сыға. Ҡасандыр ҙур-ҙур ҡалаларҙа тормош гөрләп торғанын инде бер нәмә лә хәтерләтмәй, ҡала булғанын тик белгес-археологтар ғына билдәләй ала. Ошо емереклектәрҙе тикшереүсе археологтар урман шырлыҡтарында йәшәүсе майяларҙың вариҫтарынан: "Был ҡалалар кемдеке, улар ҡасан, кем тарафынан төҙөлгән?" - тигән һорауға "Белмәйбеҙ" тигәндән ары бер ниндәй яуап ишетә алмайҙар. Халыҡтың тарихи хәтере юҡ ителгән, тарих сылбыры өҙөлгән. Халыҡтың бындай артҡа сигенеүен, киренән боронғолоҡҡа ҡайтыуын тарихсы-этнографтар икенсел ҡырағайлыҡҡа ҡайтыу ("вторичная дикость") тиҙәр. Бындай икенсел ҡырағайлыҡҡа ҡайтыу бер индеецтар өсөн генә хас күренеш түгел. Тарихта бындай факттар булып тора. Ошондай уҡ факты Тымыҡ океан киңлектәрендә ҡасандыр бөйөк диңгеҙселәр һаналған маори халҡы тарихында ла күрергә була. Хәҙер иһә маориҙар үҙҙәренең ата-бабаларының ҡасандыр океан гиҙеүен ишетеп, быны әкиәт тыңлаған кеүегерәк ҡабул итәләр. Америкалағы инк цивилизацияһы ла европалылар тарафынан ер йөҙөнән юҡ ителә һәм хәҙер джунглиҙарҙа йәшәгән инктарҙың вариҫтары үҙ ата-бабаларының мәҙәниәте тураһында бер нәмә лә белмәй.

Башҡорт халҡы үҙ тарихи юлында бер нисә тапҡыр әҙәм балаһы күтәргеһеҙ һынауҙар аша үтергә мәжбүр була. Был һынауҙарҙа ул күп юғалтыуҙар кисерә. Ошо юғалтыуҙарҙың иң аяныслыһы - үҙебеҙҙең тарихыбыҙҙың күп өлөшөнән яҙыуҙыр. Әммә һуңғы йылдарҙа башҡорт үҙ тарихына иғтибарын бермәбер арттырҙы. Сөнки халыҡ үҙенең хаҡ тарихына һыуһаған. Был, әлбиттә, ҡайһы берәүҙәргә оҡшамай.

Был донъяла альтруистар юҡ. Һәр нәмәнең артында ниндәйҙер төркөмдөң, партияның, халыҡтың ихтыяждары һәм мәнфәғәттәре йәшерелгән була. Ҡасандыр студент йылдарында беҙҙе, буласаҡ юристарҙы, әҙәм балаһының һәр бер ҡылығы, эше артында ниндәй ҙә булһа берәй мотив ята, тип өйрәткәйнеләр. Ошо һүҙҙәрҙең дөрөҫлөгөнә күп тапҡыр шаһит булырға тура килде. Шуға ла ҡайһы берәүҙәрҙең, беҙҙең халыҡтың киләсәге тураһында "борсолоп" яҙған хат-шиҡәйәттәре ышандырмай. Киреһенсә, был төр авторҙар үҙҙәренең ниндәйҙер мәнфәғәтен ҡайғырталыр, уларҙы нисек булһа ла бойомға ашырырға ынтылалыр, тигән уй ғына тыуа.

Джон Ле Карре тигән элекке шпион булған бер яҙыусының : "Ниндәй халыҡтың ирекkә хаҡы бар?" - тигән һорауға: "Донъяға теше-тырнағы менән йәбешкән, үҙ ирке өсөн мөмкин булғандың һәм хатта булмағандың да бөтәһен дә эшләгән халыҡ ҡына", - тигән яуабы хәтеремдә ҡалған. Ҡатмарлы тормош юлы үткән был кешелә әҙәм балаларына ҡарата бер ниндәй иллюзиялар юҡ. Уның һүҙҙәрендә аяуһыҙ ысынбарлыҡ ята. Беҙ, башҡорттар, шул һүҙҙәрҙәге әсе хәҡиҡәтте хәтерҙә тотһаҡ ине. Һәр халыҡтың үҙ ихтыяждары, үҙ мәнфәғәттәре бар. Күп милләттәрҙе берләштергән Рәсәй кеүек дәүләттә был мәнфәғәттәрҙең ҡайһы саҡта бер-береһенә ҡаршы килгән мәлдәре лә була. Ошо ҡапма-ҡаршы килгән мәлдәрҙә ихтыяждарҙы, мәнфәғәттәрҙе бер-береһенә нисектер яраҡлаштырыу, килештереү халыҡтарҙан, уларҙың сәйәсмәндәренән оло оҫталыҡ, һығылмалыҡ талап итә. Тарих фәне һәр саҡ сәйәсәт менән бәйле һәм халыҡ ихтыяждарынан, мәнфәғәттәренән сығып яҙыла. Ошо хәҡиҡәтте беҙгә лә, башҡаларға ла онотторға ярамаҫ ине.

Әлбиттә, тарих фәне бер урында тормай. Большевиктар ҡорған идеологик ҡоршауҙар юҡ булғандан һуң урыҫ тарихсылары менән бер ҡатарҙан Рәсәйҙең эреле-ваҡлы халыҡтары ла үҙҙәренең тарихын үҙҙәре аңлағанса яҙырға тотондо. Әммә ҡайһы бер тарихсылар әле булһа "өлкән ағай" комплексынан арына алмай кеүек. "Өлкән ағай" комплексы ҡайһы берәүҙәргә үҙҙәренең профессиональ кимәлен күтәреү өҫтөндә эшләп тормайынса, һауалы ғына "Мин өлкән ағай" тигән мин-минлеккә юл аса.

Психологтар һәр халыҡта милли ғорурлыҡ булыуын күптән иҫбат иткән. Был ғорурлыҡ тойғоһо халҡының тарихтағы героик эштәрен белеүҙән, шул эштәрҙә үҙ ата-бабаларының да ҡыҫылышы булыуын тойоуҙан киләлер. Элекке Рәсәй империяһы киңлектәрендә көн күреп, йәшәүҙәрен аҙаҡ СССР тигән империяла дауам иткән халыҡтарҙа ирекле йәшәү һәм ирекле фекерләү тигән тәжрибә самалы. Әле әҙ-мәҙ генә ирекkә сығып, тын алып, үҙҙәренсә уйларға, яҙырға тырышҡан тарихсыларыбыҙҙы бөйөк империя позицияларында торған һаҡ әҙәмдәрҙең Рәсәйҙе емерергә теләүҙә ғәйепләргә маташып, киренән ниндәйҙер кәртәләргә ҡыуып индерергә теләгәне күренә. Ҡайһы берәүҙәр, Чеховтың билдәле персонажы кеүек, бер ниндәй дәлилдәр килтермәй, икенсе яҡтың фекеренә ҡолаҡ һалып тормайынса, "Бының булыуы мөмкин түгел, сөнки бының булыуы бер ҡасан мөмкин түгел" тигән принциптан сығып фекер йөрөтә һаман булһа. Заманалар үҙгәреүҙе аңғармай ҡалған ҡайһы берәүҙәр ошондай фекерләүҙән ҡотола алмайынса, башҡортҡа һаман да "өлкән ағай" булырға маташа. Үҙенең милли иркен, дәрәжәһен, Рәсәй империяһында бүтән бер халыҡ та башҡорт кеүек дарьялай ҡан кисеп яҡламағандыр. Күпме генә тырышһалар ҙа, халыҡтың хәтеренән ул тарихты юйып ырғытып булмаясаҡ. Башҡорт үҙенең дәрәжәһен элек-электән белеп, тойоп йәшәгән халыҡ. Башҡорттоң ошо сифатын белеү үҙ халҡын дәүләт тотҡаһы һанаған ҡайһы берәүҙәрҙең һарыуын ҡайнаталыр кеүек.

Хат авторҙарының башҡорт тарихсыларын марксистик догмаларҙан ҡотола алмауҙа ғәйепләп, чиновниктарға мөрәжәғәт итеүе ул авторҙарҙың үҙҙәренең шул һыҙыҡтан бер нисек сыға ла, ҡотола ла алмағанын күрһәтмәйме ни? Башҡорт милләтле тарихсылар ниндәйҙер яңылыҡ табырға, уны күрһәтергә ынтылған саҡта, хат авторҙары "Башҡорттарға тарих яҙырға рөхсәт итергә әле иртәрәк, нисек, нимә яҙырға икәнен тәүҙә өҫтә хәл итергә тейештәр", тигән тапалған совет юлынан атлауын белә. Совет йылдарында башҡорттоң үҙенең тарихын белергә ынтылыуы һәр саҡ шик аҫтына алынып, был ынтылыш милләтселек тип аңлатылып килгәнгә күрә, беҙҙә милләтселектә ғәйепләнеүҙән өркөп, ниндәйҙер бер үҙ-үҙеңде һаҡлау комплексы формалашты. Хат авторҙарының ошо хәлде яҡшы белеп, һаман да элекке ысул менән эш иткәнен күрмәү мөмкин түгел. Башҡортостан Фәндәр академияһы үткәргән түңәрәк ҡорҙа сығыш яһаған тарихсыларҙы тыңлап ултырғанда ошондай уйҙар тыуҙы миндә.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ.**

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

**Өфө-II ҡаласығы тирәләй тоҡанған, күптән инде фән сиктәренән сыҡҡан бәхәскә ҡыҫылмаҫ та инем. БР Президенты Рөстәм Хәмитов исеменә дүрт тарихсы яҙған хатта Башҡорт ҡалаһы тураһындағы "хәбәрҙе ҡабартҡан" "тиҙ ышаныусан киң мәғлүмәт саралары һәм телевидение" адресына дошмансыл баҫымсылыҡ яһала. Шуға ла Президенттың 2010 йылдың көҙөндә Өфө-II ҡаласығына барып ҡайтҡандан һуң яһалған һығымталарының дөрөҫлөгөндә шик тыуҙырыу өсөн әҙерләнгән документҡа ҡул ҡуйыусыларға яуап бирмәй ҡала алманым.**

# БАШҠОРТ ҠАЛАҺЫНЫҢ...

## кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәре күҙ алдында




Мин Өфө-II ҡаласығы буйынса ике фильм әҙерләнем ("Юғалған ҡаланы эҙләгәндә - I", "Юғалған ҡаланы эҙләгәндә - II"). Күптән инде көнсығыш (ғәрәп-фарсы) сығанаҡтарҙы өйрәнеү менән шөғөлләнәм. Академик журналдарҙа ("Вопросы истории", "Oriens") мәҡәләләрем баҫылды. Шуға күрә һығымталарым үҙемдең эҙләнеүҙәрем һөҙөмтәләренә нигеҙләнә.

Хат авторҙарының "Урта быуат сығанаҡтары контексынан йолҡоп алынған (бында XIV быуаттағы ғәрәп авторы Ибн Халдундың сығанағы күҙҙә тотола. - **Авт.**) "Башҡорт ҡалаһы", "башҡорт хандары" тураһындағы шикле тезистар ысын мәғәнәһендә пиар-компанияға ҡотҡо һалды", тип раҫлауынан башлайыҡ. Авторҙар бик күп көнбайыш Европа карталарында (Пицигани, Меркатор, Келлер карталары, Каталон атласы һ.б.) Башҡорт атамаһы менән билдәләнгән ҡала булыуын белә тороп, Башҡорт ҡалаһы телгә алынған берҙән-бер сығанаҡ тип Ибн Халдунды ғына иғлан итә. Көнбайыштың Европаның көнсығышы тураһындағы географик күҙаллауҙар эволюцияһы мәсьәләһен бары тик белгестәр генә тикшерә ала. Әммә Пасхарти топонимының урынлашыуын аныҡлау процесы артында ябай тап килеүҙән тыш, ҙурыраҡ ниәт тора икәне былай ҙа аңлашыла. Ағалы-ҡустылы Пициганиҙарҙа Пасхарти яҙыуы Волганан көнбайышҡа ҡарай "асыҡ яланда" тора. Каталон атласында иһә ул Волганың ниндәйҙер ҡушылдығында (Камамы, Ағиҙелме) билдәләнә. Меркаторҙа Пасхарти ҡалаһын ике йылға ҡушылған ерҙә - Ағиҙел менән Ҡариҙелдең һыҙаттарын хәтерләткән пунсонда күрәбеҙ. Ибн Халдундан быға тап килгән өҙөк килтерәйек: "Үрҙә, Сыңғыҙхан ошо дәүләткә (Алтын Урҙаға) нигеҙ һала, тиелә, әле ул унығ улы Душихандың (Джучи) ҡулында, ул унда батша. Был ханлыҡ төньяҡта бик ҙур, ул Хәрәзмдән Йәркендегә (Яркенда), Соғдаға, Һарайға, Маджар, Арран, Сарҙаҡ (Судак), Булғар, Башҡурд һәм Джулманға тиклем. Был батшалыҡ сиктәрендә Ширван ҡалалары иҫәбенән Баҡы ҡалаһы һәм уның эргәһендә Демир Ҡапы (Дербент) тип аталған тимер ҡапҡалар бар. Был батшалыҡтың сиктәре көньяҡта әл-Кустантиниййаға тиклем йәйрәй. Был батшалыҡ халҡы күп булған аҙ һанлы ҡалаларға эйә. Хәйер, Аллаһ яҡшыраҡ белә!" Ғәрәп авторының пассажынан күренеүенсә, Алтын Урҙаны һүрәтләгәндә ҡалалар менән Урҙаның өлкәләре лә бер рәттә тора, шуға күрә ул Башҡурд атамаһы аҫтында нимәне күҙ уңында тотоуын - ҡаланымы, илдеме - асыҡлауы ҡыйын. Ә "башҡорт хандары"ның бында ни ҡыҫылышы бар? Улар хаҡында Ибн Халдун бер нәмә лә белмәгән һәм хат авторҙарының "контекстан йолҡоп алынған сығанаҡтар" тиеүе аңлашылмай.

Хәҙер фәнни бәхәс сиктәренән сыҡҡан "башҡорт хандары" тураһында. Хат авторҙары Н. Мәжитовтың хандар хаҡындағы фекерен сәйәси ангажемент тип иҫәпләй, әммә үҙҙәре яҙған хаттың да шундай уҡ ангажемент, ләкин кире позициянан булыуын иҫәпкә алмай. Н. Мәжитов башҡорт дәүләте һәм башҡорт хандары булғанлығын иҫбат итергә тырыша. Икенселәр быны апелляцияһыҙ инҡар итә. Әммә был икенселәр хаҡлыраҡ түгел, сөнки улар Гардизи, Масуди, Иҙриси һәм Иоганка Венгр килтергән дәлилдәрҙе бөтөнләй күҙгә лә элмәйҙәр. Мәҫәлән, Масуди, бәжәнәктәрҙең конфедерацияһын һүрәтләп, былай ти: "Уларҙың торлаҡтары әл-Хазар иленә йәнәш тора. Уларҙың араһындағы беренсе ҡәбилә баджна (йәғни яджни) тип атала, һуңынан баджғурт тип аталған икенсе ҡәбилә, уларҙың артынан бәджнәк тип аталған өсөнсөһө килә. Ул ошо дүрт ҡәбилә араһында үҙенең ҡеүәте менән иң көслөһө. Уларҙан һуң нәүкерҙә (наукерда) тип аталған ҡәбилә килә. Уларҙың батшалары - күскенселәр". Ошо дүрт төрки ҡәбиләнең һәр ҡайһыһының үҙ "малигы" булыуы тураһындағы иҫкәрмәләр артабан да текста осрай. Гардизи менән Иҙрисиҙең башҡорттарҙың хакимдары тураһындағы мәғлүмәттәрен анализлау бик күп ваҡытты алыр ине, шуға күрә ғәрәп географик әҙәбиәтенән азат көнбайыш Европа традициялары мәғлүмәттәрен генә килтерәйек. Шәхсән Башҡортостанда булған XIV быуаттың венгр миссионеры Иоганка Венгр былай тип белдерә: "...мин, Иоганка, ике венгр туғаным һәм бер инглиз менән Баскардияға, татарҙарға (йәғни монголдарға) буйһонған ҙур халыҡ эргәһенә барып еттек. Бөтә Баскардияның батшаһы һәм уның ҙур ғаилә ағзалары сарациндарҙың хатаһы (йәғни ислам) менән зарарланғайны....Беҙҙе ҡулға алып, аяуһыҙ рәүештә тимергә бығаулап, төрмәгә бикләнеләр". Сығанаҡтарға күҙ йүгертеп кенә танышып сыҡҡанда ла бихисап һорауҙар тыуа: баджғурт тип аталған халыҡтың "малигы", "бөтә Баскардия батшаһы" ниндәй булған, ул ҡайҙа йәшәгән һәм Иоганка ниндәй төрмәгә ябылған? Был һорауҙарға яуап эҙләү урынына авторҙар башҡорттарҙың, ниндәй ҙә булһа дәүләт ойошмаһы булыу мөмкинлеген инҡар итә. Әммә был фәнни ҡараш түгел, ә билдәле идеологик ҡуйылыш.

Хәҙер Өфө-II ҡаласығы тураһында. Хат авторҙары археологик һәйкәлдең әһәмиәтен шик аҫтына ҡуя, уны ғәҙәти тип атай һәм "ҡаланың мәҙәни ҡатламы һуңғы йылдарҙағы төҙөлөштәр ваҡытында тулыһынса емерелгән" тип раҫлай. Былдай белдереүҙәрҙән һуң бары бер генә юл ҡала: объект өҫтөнә асфальт түшәргә лә эш тә бөтә. Мин Рәсәйҙең абруйлы археологтарының береһе И.Л. Кызласов (тарих фәндәре докторы, Рәсәй Фәндәр академияһының Археология институты Евразия яланы урта быуат археологияһы төркөмө мөдире) менән әңгәмәләштем. Ул Өфө-II ҡаласығы бөтә Көнсығыш Европала аналогы булмаған уникаль һәйкәл, ти. Уның һүҙҙәре атап үтелгән фильмдарҙа ла килтерелә. Уның фекеренсә, был, һис һүҙһеҙ, ҡала, һәм башҡорт ҡалаһы. Археолог булараҡ, мин шәхсән уға ышанам, ә В. Ивановҡа түгел.

Өфө-II-не "башҡорт ҡалалары" иҫәбенә индерергә нигеҙ бармы? Бар, тип уйлайым. Быныӊ өсөн әл-Иҙрисиҙең "Нузхат әл-муштак" тип аталған яҙмаларын уҡыу ҙа етә. Унда ул кәм тигәндә биш башҡорт ҡалаһын атай. Был осраҡта нимә эшләргә? Н.Мәжитов, һис һүҙһеҙ, ғәрәп географының башҡорттар һәм башҡорт ҡалалары тураһындағы мәғлүмәттәренә ышана һәм уларҙың береһе Өфө-II ҡаласығына тап килә, тип уйлай. Ҡаршы яҡ, минеңсә, әл-Иҙриси килтергән мәғлүмәттең хаҡлығын кире ҡаға. Тик нимә нигеҙендә? Билдәһеҙ. Бары тик үҙҙәренә шулай тойолған өсөн генәлер, моғайын. Әммә был тағы ла фәнни ҡараш түгел. Миҫал өсөн, әл-Иҙрисиҙең яҙмаларын төп тикшереүсе И.Г. Коновалова был мәсьәләгә бик һаҡ ҡараған һәм ҡәтғи һығымта яһарға тырышмаған.

Әл-Иҙрисиҙең яҙмаларында башҡорттар тураһында һүҙ барған урындарҙы анализлағанда авторҙың кәм тигәндә өс сығанаҡҡа - үҙенән алда шөғөлләнгән әл-Истархи һәм Ибн Хаукаль яҙмаларына (хатта әл-Балхиҙың юғалған яҙмаларына ла), халыҡтан һорашып яҙып алған материалға һәм сәйәхәтселәрҙең юл карталарына таяныуын аңлайһың. Әл-Иҙриси биргән мәғлүмәттең күләме шул тиклем ҙур, әһәмиәтле, оригиналь һәм төрлө-төрлө, уны ниндәйҙер аныҡ ҡына сығанаҡтар төркөмөнә индереп булмай. Был ҡалаларҙағы халыҡтың нимә менән шөғөлләнеүе хаҡындағы ентекле мәғлүмәт - ул, моғайын, сауҙагәрҙәрҙең һәм сәйәхәтселәрҙең телдән биргән мәғлүмәте генәлер. Иҙрисиҙең үҙенең мәғлүмәттәрен ниндәйҙер бер "ялған" документтан алыуы тураһында һүҙҙең булыуы ла мөмкин түгел. Ул файҙаланған Башҡортостан тураһында мәғлүмәт сығанаҡтарының сығышы буйынса бер төрлө булмауын авторҙың яҙмаларының төрлө өлөштәрендә был топонимды төрлө формала яҙыуы ла һөйләй: 6-сы һәм 7-се климаттарҙа - ул Басджирт йәки Басджурт иле, ә 5-се климаттың 8-се секторында - әл-Башджурдиййа. "Башҡорт ҡалалары" йәки "Басджирт иле ҡалалары" атамаһы үҙенең килеп сығышы менән бары тик сығанаҡтарға бурыслы, ә "Нузхат әл-муштак" авторының уйҙырмаларына түгел.

Шундай фекер барышы менән дә осрашырға тура килде: йәнәһе, Башҡортостанда ҡалалар булғас, ни өсөн ҡала мәҙәниәте эҙһеҙ юғалған? Тарихҡа мөрәжәғәт итһәк, ҡайһы бер халыҡтар тарихында үҫеш (прогресс) кенә түгел, артҡа китештең (регресс) дә булыуын күрербеҙ. Мәҫәлән, Енисей ҡырғыҙҙарын алайыҡ. Уларҙың үҫешкән дәүләте, ҡалалары, яҙмаһы була. XVII быуатта Минусин соҡорона рус кешеләре килгәндә, хакастарҙың - ҡырғыҙҙарҙың вариҫтарының бер нәмәһе лә ҡалмаған була. Мәҙәни артҡа китеш күҙ алдында. Күрәһең, башҡорттар менән дә шундай уҡ хәл ҡабатланған. Шуға ҡарамаҫтан, ҡасандыр йәшәгән ҡалалар тураһында хәтер XVIII быуатҡа тиклем һаҡланған. П.И. Рычковтың Ҡара-табын олоҫо старшинаһы Ҡыҙрас Муллаҡаевҡа һылтанып нимә тип яҙғанын иҫкә төшөрәйек: "Ҡаҙан батшалығының Рәсәй скипетрына башҡорттар ҙа буйһонғанға тиклем бик күп алда, хәҙер Өфө ҡалаһы торған урында Ағиҙелдең үрге яғына Ҡариҙелдең ҡушылған еренә тиклем, һәм Өфин, йәғни йылға эргәһендәге тауҙарға тиклем ҙур ҡала булған, шулай итеп уның оҙонлоғо ун саҡырымға һуҙылған".

Н. Мәжитовты тәнҡитләргә мөмкин һәм кәрәк тә. Тәү ситатта, Өфө-II ҡаласығы мәҙәниәте тураһындағы фекерен йыш үҙгәрткәне, уның этник атрибуцияһы, оппоненттарына тәнҡитләү өсөн даими сәбәп биреүсе ғәҙәти булмаған фекерҙәре өсөн. Шуға ҡарамаҫтан, был осраҡта беҙ Сент-Экзюпериҙың астероид асыусы төрөк астрономы тураһындағы сюжет менән эш итәбеҙ. "Астроном шул саҡта үҙенең һоҡланғыс асышы тураһында Халыҡ-ара астрономик конгреста хәбәр итә. Әммә уға ереү ҙә ышанмай, бары тик шуның өсөн - ул төрөксә кейенгән була". Хат авторҙары нимә генә тимәһен, Н. Мәжитовтың һығымталары нигеҙләнгән өс бағана - әл-Иҙрисиҙең яҙмалары, картография материалдары (Иҙрисиҙең һәм уның көнбайыш Европалағы коллегаларының карталары), һәм, әлбиттә, археология дәлилдәре ысынбарлыҡ. Уларҙы объектив баһаламау мөмкин түгел.

**Салауат ХӘМИҘУЛЛИН,**
**тарихсы, журналист.**

**✓ Ҡушымта ойоштороу документы, хоҡуҡ биреүсе документ булып тора. Беҙ үҙебеҙҙең Договор һәм Ҡушымта менән Башҡортостандың Рәсәй составында айырым статусҡа эйә булыуын раҫланыҡ. Был - бөтөнләй икенсе һәм яңы күренеш.**



# СУВЕРЕНИТЕТ – УЛ...

## милли хәрәкәттең ҡаҙанышы

**1992 йылдың 31 марты Башҡортостан тарихында үҙенсәлекле эҙ ҡалдырған, яңы ҡоролошҡа нигеҙ һалған әһәмиәтле көндәрҙең береһе булды. Сөнки бынан тап 20 йыл элек Рәсәй Федерацияһының дәүләт власы органдары менән уның составындағы суверенлы республикаларҙың дәүләт власы органдары араһында үҙ-ара вәкәләттәрҙе һәм идара итеү сиктәрен айырыу тураһында Федератив Договорға ҡул ҡуйылды. Башҡортостан Республикаһы уға Ҡушымта менән ҡул ҡуйҙы һәм шул рәүешле үҙенең айырым статусын билдәләне. Ошо ваҡиғаларҙың уртаһында ҡайнаусы, Федератив Договорға Ҡушымтаны әҙерләүселәрҙең береһе, сәйәсәт фәндәре докторы, профессор, әлеге ваҡытта Башҡортостан Республикаһы Фәндәр академияһының вице-президенты Мансур Әнүәр улы ӘЙҮПОВтан ҡабат ошо көндәргә урап ҡайтып, хәтер йомғағын һүтеүен, ғөмүмән, Рәсәйҙәге милли сәйәсәт тураһындағы фекерҙәре менән уртаҡлашыуын һораныҡ.**

### Беҙ - яңы Федерацияға нигеҙ һалыусылар

1992 йылдың мартында республикабыҙ Президенты Мортаза Рәхимов етәкселегендәге вәкәләтле делегация Федератив Договор төҙөү маҡсаты менән Мәскәүгә барҙы. Уның составында мин дә булдым. Халыҡ беҙҙе шундай наказ менән оҙатып ҡалды: Договорға мотлаҡ Башҡортостан Республикаһы суверенитеты тураһындағы Декларация иҫәпкә алынғанда ғына ҡул ҡуйырға, әгәр ҙә юҡ икән, республикаға ҡайтып йөрөмәгеҙ!

Мәскәүгә барып урынлашҡас, Мортаза Ғөбәйҙулла улы Кремлгә Борис Ельцин, Виктор Черномырдин эргәһенә барып, осрашып ҡайтты, Рамаҙан Абдулатипов менән һөйләште. Әммә мәсьәләгә һаман асыҡлыҡ инмәгәйне әле: нимә эшләргә, беҙҙең үҙаллылыҡты аңлаған, аңларға теләгән кеше юҡ, килешеүгә ҡул ҡуябыҙмы, юҡмы? Ә был мәсьәләләр делегация ағзалары өсөн бик мөһим. Сөнки Декларацияла төп нигеҙҙе шундай пункт тәшкил итә: "Башҡортостан Совет Социалистик Республикаһы территорияһындағы ерҙәр, ер аҫты, тәбиғәт байлыҡтары, башҡа ресурстар, шулай уҡ бөтөн иҡтисади һәм фәнни-техник ҡеүәт уның күп милләтле халҡының милке булып тора...". Чечня, Татарстан Республикалары ҡул ҡуйыуҙан баш тарта. Беҙгә нишләргә?

Кисен беҙ - Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов, Ирек Мөҡсинов һәм мин буласаҡ Договорҙы яҡлап сығыш яһауҙың өс вариантын әҙерләнек. Беренсе вариант: Договорға ҡул ҡуймайбыҙ һәм ни өсөн ҡуймағаныбыҙҙы дәлилләйбеҙ. Икенсе вариант: Декларация иҫәпкә алынған осраҡта ғына ҡул ҡуябыҙ. Өсөнсөһө: әгәр Договорға ҡул ҡуйырға мәжбүр итәләр икән, башҡалар менән бергә генә ҡул ҡуябыҙ. Иртәнсәк Мортаза Ғөбәйҙулла улы ҡабат Кремлгә йүгерҙе. Сәғәт 12 тирәһендә ул беҙгә шылтыратып, Абдулатиповҡа барырға ҡушты. Борис Николаевич "Декларация нигеҙендә берәй нәмә уйларбыҙ", тип әйткән икән. Рәсәй Юғары Советының Милләттәр палатаһы рәйесе Абдулатиповтың кабинетына инеп, кәңәшмә үткәрә торған оҙон өҫтәленә алып килгән документтарҙы һалып, Федератив Договорға Ҡушымта яҙа башланыҡ. Кабинет хужаһы ишекле-түрле йөрөй. Ҡәләм Ирек Мөҡсинов ҡулында, мин Абдулатипов менән бәхәсләшәм. 16.00 сәғәттә Договорға ҡул ҡуйылғансы беҙ Ҡушымтаны өлгөртөргә тейеш. Оҙаҡ фекер алышҡандан һуң Федератив Договорға Ҡушымтаның баш өлөшөн һәм беренсе пунктын былай тип яҙырға ризалаштыҡ: "Договорға ҡул ҡуйғанда Башҡортостан Республикаһының яңырыусы Рәсәй Федерацияһының үҙаллы субъект булыуын раҫларға. Был осраҡта Башҡортостан Республикаһының Дәүләт суверенитеты тураһындағы декларацияһы һәм закондары нигеҙенән сығып: Башҡортостан Республикаһының территорияһындағы ер, ер аҫты, тәбиғәт байлыҡтары, башҡа ресурстар уның күп милләтле халҡының байлығы (милке) булып тора, тип эш итергә. Был милеккә эйә булыу, уның менән файҙаланыу һәм уға идара итеү мәсьәләләре республика закондары һәм Рәсәй Федерацияһының власть һәм идара итеү органдары менән килешеү нигеҙендә хәл ителә".

Тағы шуны әйтергә кәрәк: Декларацияла Рәсәй менән мөнәсәбәттәрҙә бер нисә төркөм бик мөһим мәсьәләләрҙе хәл итеүҙе талап итә ине. Беренсеһе - милек мәсьәләләре. 97 процент милке союз (80 процент) һәм Рәсәй (17 процент) ҡарамағында булған һәм үҙ территорияһындағы ни бары 3 процент милке булған Башҡортостан, Договор Ҡушымтаһының беренсе пунктына ярашлы, шул һанап үтелгән бөтә милекте (байлыҡты) тулыһынса тиерлек күп милләтле үҙ халҡы ҡарамағына ҡайтара аласаҡ. Икенсе төркөм - ул халыҡ-ара һәм тышҡы иҡтисади мөнәсәбәттәр. Был өлкәлә Ҡушымта Башҡортостанға үҙаллы эш итергә ҙур мөмкинлектәр асты. Өсөнсө төркөм - бюджетҡа һалым йыйыу һәм башҡа түләүҙәр. Дүртенсе төркөм - ул республикала үҙаллы закондар сығарыу һәм хөкөм системаһын булдырыу. Был өлкәләге мәсьәләләрҙе үҙ иркебеҙ менән хәл итәбеҙ, тип яҙылды. Бының менән бергә прокуратура, адвокатура, нотариат мәсьәләләре лә был өлкәләге ҡайһы бер вәкәләттәрҙе, әгәр уларҙы үҙ иркебеҙ менән Рәсәй Федерацияһына бирмәһәк, үҙебеҙ хәл итәбеҙ, тип килештек. Был мөһим документ Абдулатиповтың эш бүлмәһендә бер-нисә сәғәт эсендә тыуҙы. Уны яҙып бөтөрөп, Рәсәй Юғары Советының Милләттәр палатаһы рәйесенә тапшырҙыҡ. Абдулатипов Кремлгә йүгерҙе. Договорға ҡул ҡуйырға биш минут ҡалды, тигәндә, Федератив Договорға ҡул ҡуйған Георгиевский залына Мортаза Рәхимов килеп инде, уның артынса Борис Ельцин күренде. Теүәл дүрттә башта Адыгей Республикаһы, икенсе булып Башҡортостан вәкилдәре Килешеүгә ҡултамғаларын һалды.

Ҡушымтаның әһәмиәте нимәлә? Беренсенән, Ҡушымта кеүек һәр аныҡлау документы - ул ниндәйҙер дәрәжәлә ойоштороу документы, хоҡуҡ биреүсе документ булып тора. Һуңынан илдең Төп Законы ҡабул ителә. Илебеҙҙе Конституцион Федерация, тигәндә, тап ошоно - республикалар менән төҙөлгән договорҙы иҫәпкә алып еткермәйҙәр. Беҙ үҙебеҙҙең Договор һәм Ҡушымта менән Башҡортостандың Рәсәй составында айырым статусҡа эйә булыуын раҫланыҡ. Был - бөтөнләй икенсе һәм яңы күренеш. Форма буйынса ла, ғәмәлдә лә беҙ Рәсәй Федерацияһын халыҡ исеменән сығып ойоштороусылар.

Бында шундай ҡыҙыҡлы фактҡа иғтибар итергә кәрәк: 1922 йылдың 30 декабрендә СССР менән Союз килешеүе төҙөлә. Уға РСФСР делегацияһы составында башҡорттарҙан Халиҡов, татарҙарҙан - Солтанғәлиев, ҡаҙаҡтарҙан - Рыҫҡолов, шулай уҡ Үзбәкстан, Украина, Белоруссия вәкилдәре ҡултамғаһын ҡуя. Бында беҙҙең өсөн иң мөһиме нимә: делегация составында Халиҡовтың булыуы. Артабан инде Башҡортостан айырым статуста йөрөй, СССР-ҙың Юғары Советы Президиумы ағзалары араһында даими рәүештә Башҡортостан һәм Татарстан вәкилдәре була. Был беҙҙең республикабыҙҙың, тарихыбыҙҙың илдә ихтирамлы, абруйлы булыуын раҫлай.

### Империялар ни өсөн тарҡала?

Бөгөн Советтар Союзының тарҡалыуын ҡайһы бер сәйәсмәндәр уның составында милли республикалар булыуға бәйләй. Бында, бер яҡтан, хаҡлыҡ та бар, сөнки милләттәр, халыҡтар РСФСР-ҙы һәм СССР-ҙы милли ерлектә - халыҡтар федерацияһы тип төҙөнө. Барлыҡ документтарҙа ла ул дәүләттәр, халыҡтар берләшмәһе булып йөрөнө. Ләкин СССР-ҙың тарҡалыуының төп сәбәбе нимәлә һуң? Ғөмүмән, ни өсөн империялар тарҡала? Бында бөгөнгө ғалимдар Австрия-Венгрия һәм Рәсәй империяһы миҫалында ике факторҙы килтерә: күп милләтле унитар империяла үҙәктәге демократия һәм төбәктәрҙәге милли хәрәкәт империяларҙы тарҡата икән. Элек тә шулай булған, хәҙер ҙә шул хәл ҡабатлана: демократия үҫентеләре күренә башлау менән милли төбәктәрҙә милли хәрәкәттәр баш ҡалҡыта.

Уҙған быуаттың 90-сы йылдарында Рәсәйҙә ваҡиғалар шулай барҙы. Горбачев, демократия, тип һүҙ башлауы булды, иң тәүҙә ҡорос ҡоршау шикелле илде тотоп торған КПСС емерелде. Ә демократияның ҡапма-ҡаршыһы - ул тоталитаризм. Коммунистар партияһы административ-бойороҡ системаһын тотоп тора ине. Демократия шарттарында иң тәүҙә партияның үҙендә бүленеш китте: реформаторҙар һәм консерваторҙар, элита һәм контрэлита килеп сыҡты. Был күренеш тап беҙҙән, Башҡортостандан, КПСС Өлкә комитетының беренсе секретары Миҙхәт Шакировты эшенән алыуҙан башланып китте. Үҙәктә партия демократлашты, яйлап төбәк-ара депутаттар төркөмө барлыҡҡа килде, башҡа фирҡәләр тыуҙы. Балтика буйы илдәрендә, Әзербайжанда, Молдовала халыҡ фронттары, йәғни милли хәрәкәттәр баш ҡалҡытты.

Яңы осорҙа, үткән быуаттың 90-сы йылдарында беҙҙә лә демократияға милли хәрәкәт өҫтәлде. Яңы милли сәйәсәт партиянан түгел, мәҙәниәттән башланды. Мәҙәниәт һәм тел - милләттең тотҡаһы. Ә милләт тигәндә инде сәйәсәт күҙаллана. Ә сәйәсәт - ул власть менән ҙур социаль, милли төркөмдәрҙең үҙ-ара мөнәсәбәте, тигән һүҙ. Сәйәсәт тап милләттәр менән бәйле. Шуға күрә беренсе милли ойошмалар мәҙәниәтте, телде үҫтереүсе ойошма булараҡ барлыҡҡа килде. Уларға беҙҙә экологик мәсьәләләр өҫтәлде.

Ҡыҙыҡһынып, ҡайҙа ниндәй милли хәрәкәттәр барлыҡҡа килгәнен ҡарап сыҡҡас, шуны асыҡланым: беҙҙә иң тәүҙә 1988 йылда "Ғәлимйән Ибраһимов" исемендәге татар ижтимағи үҙәге барлыҡҡа килә. Башҡорттарҙың тәүге ижтимағи ойошмаһы булып "Аҡ тирмә" тыуа. 1989 йылдың йәйендә "Урал" Башҡорт халыҡ үҙәге ойоша. Уны 1917 йылдағы өс съезды иҫкә алып, дүртенсе башҡорт съезы тип үткәрәләр. Ҡабул иткән ҡарарҙар бик төплө була. Суверенитет йылдарында шул ҡарарҙарҙың күпселеге үтәлгән һәм бөгөн ҙур ышаныс менән суверенитет - милли хәрәкәттең ҡаҙанышы, тип әйтә алабыҙ.

Ул йылдарҙа икенсе һорау ҙа ҡалҡып сыҡты: ни өсөн берәүҙәр беренсе сортлы, йәғни союз республикаһы статусында, ә беҙ - икенсе сортлы, йәғни автономиялы республика статусында? Автономия нимә тигән һүҙ? Ул республика үҙендәге 3 процент мөлкәтенә хужа, тигән һүҙ. Хатта Башҡорт дәүләт академия драма театрына янғын һүндереүсе ставкаһын алыр өсөн Рәсәй Министрҙар Советының ҡарары кәрәк ине. Әммә шул уҡ ваҡытта Башҡортостан иҡтисади ҡеүәте буйынса союздаш республикалар араһында алтынсы-етенсе урындарҙы биләне. Ләкин Рәсәйҙең республика, край, өлкәләре араһында социаль мәсьәләләр буйынса иң

> ***Ул йылдарҙа икенсе һорау ҙа ҡалҡып сыҡты: ни өсөн берәүҙәр беренсе сортлы, йәғни союз республикаһы статусында, ә беҙ - икенсе сортлы, йәғни автономиялы республика статусында? Автономия нимә тигән һүҙ? Ул республика үҙендәге 3 процент мөлкәтенә хужа, тигән һүҙ. Хатта Башҡорт дәүләт академия драма театрына янғын һүндереүсе ставкаһын алыр өсөн Рәсәй Министрҙар Советының ҡарары кәрәк ине. Әммә шул уҡ ваҡытта Башҡортостан иҡтисади ҡеүәте буйынса союздаш республикалар араһында алтынсы-етенсе урындарҙы биләне. Ләкин Рәсәйҙең республика, край, өлкәләре араһында социаль мәсьәләләр буйынса иң аҙаҡта булдыҡ. Тап шул сәбәптәр интеллигенцияны борсоп, милли, экологик хәрәкәт ойоштороуға сәбәпсе булды ла инде.***

аҙаҡта булдыҡ. Тап шул сәбәптәр интеллигенцияны борсоп, милли, экологик хәрәкәт ойошторолоуға сәбәпсе булды ла инде.

## Демократияны кем күргән?

Демократия - ҡағиҙәләре билдәле, ә һөҙөмтәләре билдәһеҙ булған процесс. Мәсәлән, һайлауҙарҙы ғына алып ҡарайыҡ: һайлау ҡағиҙәһе бар кеүек, ләкин уны нисек теләйбеҙ, шулай үткәрәбеҙ, теләгән кешене үткәрергә тырышабыҙ. Илдәге мартта булған ығы-зығы, Болотный ваҡиғалары, ҡайһы берәүҙәр фекеренсә, шунан килеп сыҡты. Граждандар йәмғиәте, уның институттары менән власть бер-береһен тыңлай икән, власть та, йәмғиәт тә үҙгәрә. Сәйәси процестар ул субъект менән субъект мөнәсәбәтен күҙаллай. Был идара итеү ҙә, кемдәндер өҫтөнән өҫтөнлөк итеү ҙә түгел. Мәсәлән, ижтимағи хәрәкәттәр етәксеһе власть етәксеһенә барып, халыҡтың талабын еткереп, власть уны тыңлай икән, был - ике субъекттың үҙ-ара килешеп эш итеүе, тигән һүҙ. Власть башында ултырған етәкселәр, граждандар институттары вәкилдәре менән ҡулға-ҡул тотоношоп, илдән, халыҡтың иң мөһим киҫкен мәсьәләләрен хәл иткәндә генә ил алға барасаҡ, минеңсә.

## Системалар донъяһы

Политолог И. Валлерстайндың фекеренсә, донъя системаларын анализлау - ул фәндә яңы парадигма. Ул төп анализ берәмеге итеп социаль тормош ҡайнаған донъя системаларын алырға тәҡдим итә. Йәғни беҙҙе урап алған бөтөн нәмә донъя-системаларҙан тора, уның үҙәге, сите бар. Донъя-системала һәр ваҡыт үҙәк идара итә. Был яңы ҡабул ителгән тәғлимәт булһа ла, тарихҡа күҙ һалһаҡ, Рәсәй, Советтар Союзында милләттәр үҫеше ошо тәғлимәт нигеҙендә үҫешкән кеүек. Мәсәлән, беҙҙең илдә В. И. Ленинды ошо теорияның етәксеһе тип беләбеҙ, Сталин 1912-1913 йылдарҙа милли мәсьәлә буйынса ҙур мәҡәлә яҙа. Ленин уны уҡып сығып, партиялаштарына таныштырырға һәм иҫкәрмәләрен индерергә ҡуша. Был - милли мәсьәлә буйынса беренсе, берҙән-бер коллектив хеҙмәт була. Ғөмүмән, минең уйымса, большевиктар XX быуат башында, Европа илдәрендә, бигерәк тә Австрия-Венгрия империяһында милли-азатлыҡ хәрәкәте башланғас, милли мәсьәләләргә, бигерәк тә был өлкәнә фәнни тикшереүгә ҙур иғтибар бүлә. Тап ошо йылдарҙа милләттәрҙең үҙбилдәләнеше хаҡында фекерҙәр киң тарала. РСДРП вәкилдәре күп милләтле Рәсәй өсөн бик мөһим булған был мәсьәләне яҡшылап тикшерә. Партия программаһында крәҫтиәндәр мәсьәләһенән һуң милли мәсьәлә буйынса бүлек барлыҡҡа килә.

Шул уҡ XX быуат башында тағы бер төркөм дәүләт эшмәкәрҙәре, ғалимдар яңы Рәсәйҙең милли үҫеше, дәүләт ҡоролошо юлдарын тоҫмалларға тырыша. Бында Австро-Венгриялағы хәлдәрҙе ентекләп тикшергән, ошо империя парламентында Чехия вәкиле булған хоҡуҡ ғилеме белгесе К. Крамерждың Беренсе Бөтә донъя һуғышынан һуң донъя илдәре ҡоролошо, Рәсәйҙең киләсәге хаҡындағы яҙмалары ҡыҙыҡлы. Ул былай тип яҙа: "...күпме ҡан түгеп, күпме һуғыштар үткәреп, шул тиклем территорияны яулап алған Рәсәй империяһы уның халыҡтарын ваҡ дәүләттәргә бүлгеләүгә бер ваҡытта ла ризалашмаясаҡ. Рәсәй мотлаҡ унитар булырға, бер етәксе - батшамы ул, президентмы - етәкселек итергә тейеш. Шул бер етәксе милли автономия, республика, крайҙарҙағы етәкселәрҙе тәғәйенләп ҡуйырға, йәғни власть вертикале булырға тейеш", - ти.

Ошо юлдарҙы уҡығас һәм И.В. Сталиндың милли мәсьәләләргә ҡағылған күпселек хеҙмәттәре менән танышҡас, мин: "Сталин бабай Лениндың ғына түгел, К. Крамерждың "Рәсәй дәүләте Конституцияһы"ның проектын һәм И. Валлерстайндың донъя-система концепцияһын да 100 йылға элек һиҙемләгән икән", - тигән фекергә килдем. Минеңсә, Рәсәй исемле күп милләтле оло дәүләтебеҙҙең һуңғы йөҙ йыллыҡ тарихында Башҡортостаныбыҙҙың да лайыҡлы урын алырға ынтылыуын ошо фәнни ҡараш нигеҙендә аңларға һәм аңлатырға мөмкин. Быны иҫбатлау өсөн И. Сталиндың яҙмаларына мөрәжәғәт итәйек: "Беҙҙең бурыс - бөтөн рус булмаған халыҡтарға алға киткән үҙәк Рәсәйҙе ҡыуып етергә ярҙам итеү. Бының өсөн ошолар шарт: был халыҡтарҙың милли үҙенсәлектәренә яуап биргән формаларҙа уларҙың совет дәүләтселеген үҫтереү һәм нығытыу; туған телдә эшләүсе хөкөм, идара итеү, хужалыҡ һәм хакимиәт органдарын ойоштороу, уларҙы урындағы халыҡтың көнкүрешен һәм ғөрөф-ғәҙәтен белгән урындағы кадрҙар менән тәьмин итеү; үҙҙәрендә туған телдәге матбуғат, мәктәп, театр, клуб һәм, ғөмүмән, мәҙәни-ағартыу эштәрен үҫтереүгә булышлыҡ итеү".

Күренеүенсә, был осраҡта үҙәк менән төбәктәр үҫешенә донъя-система ҡарашына нигеҙләнеп, үҙәк-төбәк мөнәсәбәттәрендә алға киткән үҙәк әйҙәүсе, ә ситтәге төбәктәр уның өлгөһөндә үҫеүсе булып сыға. Бында үҙәктең төбәктәргә ярҙам итеүе, был эште уларҙың милли, тарихи, хужалыҡ үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып башҡарыу зарурлығы һыҙыҡ өҫтөнә алына.

XX быуат башында демократик Рәсәй сиктәрендә тап башҡорттар төүгеләрҙән булып үҙбилдәләнеш ала, һуңынан төүгеләрҙән булып Совет Рәсәйе менән килешеү төҙөп, Совет федерализмына төүге нигеҙ таштарын һала.

## Эште үҙебеҙҙән башлайыҡ...

Бөгөн милли тел, мәҙәнилек мәсьәләләре бик етди тора. Был хаҡта 2011 йылда Өфөлә үткәрелгән Рәсәй Федерацияһы Дәүләт Советы Президиумы ултырышында ла әйтелде. Мартта Президент итеп һайланған В.В. Путин үҙенең 31 ғинуарҙа "Независимая газета"ла баҫылған мәҡәләһендә: "Беҙгә гражданлыҡ рухына нигеҙләнгән милли сәйәсәт стратегияһы кәрәк. Беҙҙең илдә йәшәгән кеше үҙенең дине һәм милләте хаҡында онотторға тейеш түгел. Әммә ул иң элек Рәсәй гражданины булырға һәм ошоноң менән ғорурланырға тейеш. Берәүҙең дә милли һәм дини үҙенсәлектәрен дәүләт закондарынан өҫтөн ҡуйырға хаҡы юҡ. Ләкин был осраҡта дәүләт закондары милли һәм дини үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алырға тейеш", - тип яҙҙы.

Күренеүенсә, милли мәсьәләнең ҡуйылышы бик етди һәм төплө. Ҡыҫҡаса әйткәндә, һүҙ кешенең милли һәм дини үҙенсәлектәрен уның дөйөм гражданлыҡ сифаттары менән яраштырыу тураһында бара. Был бик ҡатмарлы,



хатта урыны менән ҡапма-ҡаршылыҡлы эш, бигерәк тә милли республикаларҙа етәкселәрҙән, сәйәсмәндәрҙән, ғалимдарҙан, журналистарҙан, мәғариф, мәҙәниәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәренән эштең асылын белеү, төптән уйлап эш итеүҙе талап итә.

Миҫалға тел мәсьәләһен алайыҡ. Бөгөн бөтәбеҙ ҙә башҡорт теленең яҙмышы, уның үҫеше, ҡулланыу даирәһен киңәйтеү, дәүләт теле сифатында ҡулланыу мәсьәләләре менән ҡыҙыҡһына. Тормошта осраған ҡайһы бер хәлдәргә борсолабыҙ. 1994 йылда ҡабул ителгән "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы Закон бар. Рәсәй Федерацияһы Конституцияһында, туған телдәр тураһында федераль закондарҙа Рәсәйҙә йәшәгән халыҡтарҙың телдәренә, шул иҫәптән башҡорт теленә ҡағылған нормалар бар. Республикала туған телдәрҙе тергеҙеү, һаҡлау һәм үҫтереү тураһында 15 йылдан ашыу элек махсус Дәүләт программаһы ҡабул ителде. Был эште үтәүгә шаҡтай аҡса бүленә. Ләкин... Йылдар үткән һайын ижтимағи тормошта һәм көнкүрештә башҡорт телен ҡулланыусылар даирәһе һәм һаны кәмей бара. Туған телен башҡорт теле тип иҫәпләүсе милләттәштәребеҙҙең һаны ла кәмеүҙә дауам итә. Халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре, социологик тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, башҡорттарҙың 70 процент самаһы ғына башҡорт телен туған теле тип иҫәпләй, ә туған телендә һөйләшеүселәр тағы ла аҙыраҡ. Ошоларҙы уйлаһаң, эштең мөшкөл генә түгел, бик аяныслы булыуы күҙгә ташлана.

Телде һаҡлауҙы, үҫтереүҙе үҙебеҙҙән башларға кәрәк. Башҡортостан Фәндәр академияһы һәм уның гуманитар йүнәлештәге институттары, Рәсәй Фәндәр академияһының тел, әҙәбиәт һәм тарих, этнологик тикшеренеүҙәр институттары, БДУ, БДПУ һәм башҡа юғары уҡыу йорттарының кафедралары ғалимдары бергәләп республика күләмендә ике төп тема: милли үҙенсәлекте, телде һаҡлау һәм дөйөм Рәсәй гражданлығы сифаттарын тәрбиәләү мәсьәләләрен һәм башҡорт телен уҡытыу һәм заманға ярашлы үҫтереү, һаҡлау темаларын яҡын арала ғилми тикшерергә йәки яңы тәҡдимдәр эшләргә тейеш.

***Республикала туған телдәрҙе тергеҙеү, һаҡлау һәм үҫтереү тураһында 15 йылдан ашыу элек махсус Дәүләт программаһы ҡабул ителде. Был эште үтәүгә шаҡтай аҡса бүленә. Ләкин... Йылдар үткән һайын ижтимағи тормошта һәм көнкүрештә башҡорт телен ҡулланыусылар даирәһе һәм һаны кәмей бара. Туған телен башҡорт теле тип иҫәпләүсе милләттәштәребеҙҙең һаны ла кәмеүҙә дауам итә. Халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре, социологик тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, башҡорттарҙың 70 процент самаһы ғына башҡорт телен туған теле тип иҫәпләй, ә туған телендә һөйләшеүселәр тағы ла аҙыраҡ. Ошоларҙы уйлаһаң, эштең мөшкөл генә түгел, бик аяныслы булыуы күҙгә ташлана.***

## Алға ҡарап уйланайыҡ

Халыҡты алға әйҙәү өсөн милләттең ҡеүәте лә булырға тейеш. Ә беҙҙең бер ғалимыбыҙ, башҡорт дәүләтен булдырыу өсөн бөгөн милләттең ҡеүәте юҡ, тип яҙғайны. Сөнки халыҡтың ҡеүәте уның элитаһы - сәйәси, иҡтисади, фәнни-техник белгестәре, етәкселәре, күп һанлы интеллигенцияһы менән билдәләнә. Бөгөн үҫешкән халыҡтар интеллектуаль элитаға эйә, уларҙың финанс, банк, сәнәғәт эшмәкәрҙәре, фәнни-техник элитаһы бар. Ә беҙ, әгәр 10 мең кешегә күпме фән докторы тура килгәнен анализлай башлаһаҡ, иң һуңғылар рәтендәбеҙ. Уйлап ҡараһаҡ, бөгөн беҙҙең тотош тармаҡтар буйынса фән докторҙарыбыҙ юҡ. Мәсәлән, архитектура, музыка тәғлимәте һәм тарихы буйынса бер генә фән докторыбыҙ ҙа юҡ. Ә тарих, тел, әҙәбиәт, хоҡуҡ, сәйәсәт буйынса бармаҡ менән һанарлыҡ ҡына.

Бөгөн Көнбайышта күп культуралылыҡ нигеҙендә мәктәптә балалар уҡытыу ысулдары барлыҡҡа килде. Уның үҙенсәлеге шунда: төрлө милләт балаларын уҡытҡанда, уларҙың төрлө милләт вәкилдәре, төрлө культура шарттарында үҫеүе, төрлө ғөрөф-ғәҙәт, әхлаҡ һәм рухи ҡиммәттәр ярҙамында тәрбиәләнеүе иҫәпкә алына. Был эштә күп ауырлыҡтар бар, сөнки ғаиләлә төрлө өгөт-нәсихәт тыңлап, ғөрөф-ғәҙәт, рухиәт һәм тәрбиә үҙләштергән балаларҙы күп милләтле, әммә дөйөм Рәсәй дәүләте граждандары итеп тәрбиәләү ябайҙан түгел. Бында иң беренсе бурыс - төрлө милләт балаларына уҡыу барышында тиң һәм тигеҙ мөмкинлектәр тыуҙырыу. Был бурысты үтәү өсөн төрлө ата балаһына бер төрлө ҡарау шул булған төрлөлөктө арттыра ғына. Тимәк, бында ниндәйҙер ташлама яһарға кәрәк.

Төүҙә АҠШ-та, шунан һуң Европаның күп милләтле дәүләттәрендә был бурысты хәл итеү өсөн ике юл һайлайҙар. Беренсеһе - ниндәй балалар үҙҙәрен уҡыу барышында артыҡ көс түгә, дәрестәрҙә бүтәндәрҙән күберәк шөғөлләнә, тип иҫәпләй, уларҙың был фекерен иҫәпкә алырға һәм дәрестәрҙе башҡа балаларҙыҡы кеүек булһын өсөн ҡыҫҡартырға йәки еңеләйтергә. Икенсе юл - үҙҙәрен бүтәндәрҙән кәм тип иҫәпләгән балаларҙың тәрбиәһендә булған кәмселектәрҙе асыҡлап, шуларҙы бөтөрөү ысулдары индерергә. Ошо ике юл да ҡатмарлы мәҙәниәт нигеҙҙәренә өйрәтеүгә килтерергә тейеш.

Тағы бер ауырлыҡ шунда: күп милләтле йәки күп мәҙәниәтле балаларҙың иғтибарын тик уларҙың ни яғы менән бер-береһенән айырылыуына ғына йүнәлтһәк, дөйөм гражданлыҡ мәҙәниәте тәрбиәләнмәй, беҙ көндән-көн үҙебеҙҙең үҙенсәлектәребеҙгә, мәҙәниәт айырмалығына ғына иғтибар итәсәкбеҙ.

Бөгөн күп милләтле мәктәптәрҙә мәҙәниәттәрҙең алға киткәне йәки артта ҡалғаны юҡ, улар был яҡтан бер тиң, ләкин бер-береһенән айырыла ғына. Шуға күрә балаларға күп төрлө культураны һәм бер-берендең телен белеү - үҙ-ара аралашыу, бер-беренде яҡшыраҡ аңлау юлындағы кәртәләрҙе алып ташлау, дуҫлашыу өсөн кәрәк, тип аңлатыу отошло.

**Әхмәр Ғүмәр-ҮТӘБАЙ**
**менән Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**әҙерләне.**

*✓ Бәхетле булыр өсөн әҙәм балалары үҙҙәрен һәр саҡ ыңғай яҡҡа үҙгәртергә, эстән алтын кеүек таҙа, башҡаларға бал кеүек шифа булырға, Илаһ ҡанундары буйынса ғүмер итергә тейеш.*



Ҡарсыҡты кем ҡарамағына ҡалдырыу мәсьәләһе көтмәгәндә еңел генә хәл ителде лә ҡуйҙы. Өй алдында хәбәрләшеп торғанда, Ғәлиәнең ҡыҙҙары менән йәйҙәрен бергә уйнап үҫкән Нәфисә яндарына килде лә:

- Әбейемде ҡарарға кеше эҙләйегеҙ икән, тип ишеткәйнем, хуш күрһәгеҙ, мин риза, - тине.

- Ҡыйын булмаҫмы?

- Ниңә ҡыйын булһын. Әбейем түшәктә ятмай, үҙ аяҡтарында йөрөп ята. Үҙегеҙ яҡшы беләһегеҙ, мин инәйемде лә, атайымды ла ҡараным. Өйрәнгәнмен, сабырмын, түҙермен.

Һөйләштеләр, килештеләр. Ҡарсыҡтың пенсияһынан тыш, Ғәлиә тағы ла бер-нисә мең түләйәсәген әйткәс, Нәфисә тағы ла нығыраҡ ҡыуанды. Биш-алты башмаҡ аҫрап хитланғансы, баҙарға йөрөгәнсе, бер әбейҙе ҡарау отошло, ай һайын ярты һуғым малы хаҡы кереп тора. Пенсия алған ҡарт-ҡорондоң баһаһы юғары хәҙер ауыл ерендә.

* * *

Яңы йылдан һуң ҡышҡы ялда, Тәлғәт тыуған яғына ыңғайламай, Ғәлиә менән Нәрәлегә ҡәйнәһе янына ашҡынды. Хәл-әхүәлен күрерҙәр, Нәфисәне лә ун көнгә булһа ла бушандырып торорҙар. Балаларым килеп тә китмәйҙәр тип, ҡарсыҡ рәнйемәҫ, был хаҡта әсе телдәр ҙә әллә ни тел сарламаҫ. Ғүмер ҙә үҙенекен итә, ҡарсыҡты көндән көн ҡартайта. Оло йәше әле маңлайҙағы күҙен, бурбайҙағы биҙен алмаһа ла, уртындағы тешен, башындағы һушын алды, һикегә йығыуы ла ихтимал.

- Аҙашып килеп сыҡтығыҙмы әллә? - тип ҡаршыланы Сәғирә ҡарсыҡ ҡыҙы менән кейәүен. Күк ҡабағы асылғандай, зиһене яҡтырғанда көткәндер, моғайын.

- Һине һағынып, үҙеңә тауҙай шатлыҡ алып килдек, - тине Тәлғәт ҡусҡуллап күрешеп.

Ҡарсыҡ ифрат ныҡ ҡыуанды, ни ҡылырға белмәне. Йә сәйнүккә, йә кәстрүлгә тотонно, өҫтәлгә сынаяҡтарын теҙҙе. Ғәжәп итерлек киң күңелле, алсаҡ, йомарт! Бар янында бар яҡшы, сәй янында бал яҡшы тигәндәй, Ғәлиә инәһе менән Нәфисәне тән һәм йән аҙығы ла булған күстәнәстәрҙе ауыҙ итергә ҡыҫтаны. Сәй эсеп алғас, ҡаҙан тултырып аш һалды.

Туған-тумасалар, бала-сағалар ҙа Нәрәлегә юлланғас, Тәлғәт үҙ өйөн дә йылытты, ҡар тауы яһап, һыу һибеп, ейәндәргә һырғалаҡ-шылғаяҡ яһаны. Ҡунаҡтар алмаш-тилмәш килә торҙо, ҡайта торҙо. Ғәлиә менән Тәлғәт һис тә тыңғы белмәне: һыу ташыны, мунса, мейес яҡты, аш бешерҙе, табын әҙерләне, һәр кемдең күңелен күрҙе, айырыуса Сәғирә ҡарсыҡҡа ҡәҙер-хөрмәт күрһәтте.

Ата-инәгә бала бәғер, алтын бағана булғанғалыр, Сәғирә ҡарсыҡ башҡаларға ҡарағанда үҙ балаларын яҡыныраҡ күрҙе, уларҙы нығыраҡ ҡайғыртты. Бигерәк тә өлкән улы Ғәбитте. Алтмыштан уҙһа ла әле лә Ғәбит тип өҙөлә:

- Элмәктәреңде эл, өшөрһөң.

- Йоҡа кейендең, һалҡын тейҙерерһең.

- Шарфыңды һалырға оноттоң.

- Аш - ашҡа, урыны - башҡа. Ҡаҙылығын ҡап...

Арынымы, талдымы, йәнә иҫ-һушы буталдымы, бер кис ултырғанда Сәғирә ҡарсыҡ Ғәбиткә үтә сәйер рәүештә иҫкәрмәләр яһарға тотондо:

- Һеңлем, - тине Ғәлиә. - Әбейем һау ғына булһын, тип торған Нәфисә алдында уңайһыҙ бит әле. Кем әйтмешләй, килешеү - аҡсанан ҡиммәт. Нәфисә яҙға хәтле ҡараһын, унан күҙ күрер.

Ғәбиҙәләр ҡайтып китте. Ғәлиә менән Тәлғәт, Ғәбит тә юлға әҙерләнде. Сәғирә ҡарсыҡ күңелһеҙләнеп:

- Мин тағы бер үҙем ҡаламмы инде? - тине.

- Нәфисә ҡыҙың менән ҡалаһың, инәй.

- Ул минең балам түгел...

Ҡул болғап машина артынан моңһоу ғына ҡарап ҡалды Сәғирә ҡарсыҡ. Уның: "Ҡартайҙым, ҡайҙа барайым? Ҡайҙа минең хәләлем? Булһамсы ҡанатлы ҡош... " - тигәне генә Тәлғәттең ҡолағына салынды һәм ул ныҡ тетрәнеп, хис-тойғоһо ҡуҙғып, бер инәнең зарыҡҡаны тураһындағы хикәйәтте иҫенә төшөрҙө.

ҡоштар кеүек бер хәсрәтһеҙ осалһам ине... Улар осор-осорҙар ҙа берәй күл буйына ялға туҡтарҙар... Шунда туйғансы емһенеп, һыу эсеп алырҙар... Шунан тағы осоп китерҙәр," - тип уйланды, ти. Шулай ҡоштарға ҡарап зарығып ятһа, ҡолағына шундай тауыштар ишетелгәндәй тойола:

- Кил, әйҙә беҙҙең менән! Ятма зарығып, осайыҡ бергәләшеп!

Аңғанса бынның өҫтөнә бер тун килеп төшә. Инә, ауырыуын онотҡан кешеләй, ҡалҡып тороп шул тунды кейә - ҡошҡа әүерелеп, тәҙрәнән осоп сыға ла китә, ти. Донъяларын онотоп уйнап йөрөгән балаларының береһе, был хәлде күреп:




- Һинең йөрәгең насар, башҡа араҡы эсмә. Етәр, әйҙә ҡайтайыҡ.

Төнөн өйгә ҡайтып, утты ҡабыҙғас, Ғәбит тышҡа сығырға булды.

- Ҡайҙа бараһың? - тип өтәләнде инәһе.

- Йондоҙҙар ҡарап, саф һауа һулап инәм.

- Мин дә ҡалмайым.

Сәғирә ҡарсыҡ улын йәнә ире менән бутаны. Ғәбит ауыр һуланы, зиһене томалана ла китә, тип уйланы. Мәгәр ғәжәп - ҡайһы ваҡыт әңгәмәләшеп ултырғанда бик тә мәғәнәле, уйландырырлыҡ яуаптар әйтеп ҡуя. Тәлғәт уйынсалап:

- Рәсәй батшаһы әҙәмдәрҙең ғүмерен йөҙ илле йәшкә тиклем оҙайтырға вәғәҙә итә. Яңынан етмеште һүтәрһең әле, ҡәйнәм, - ти.

- Эй кейәү, кейәү... Ныҡ ҡартайғас, ыҙалап ете йыл йәшәгәнсе, ете көн йәшәү хәйерле.

Тормош көтөлмәгән хәлһеҙ, күренешһеҙ булмайҙыр инде. Ул бер алдын, биш артын күрһәтә, тип, юҡҡа ғына әйтмәйҙәр. Туғандарын күрергә килгән Ғәбиҙә лә ҡапыл ғына хәбәр һалды:

- Мин инәйҙе йәнә алып ҡайтырға булдым. Ғәббәс тә ҡаршы түгел.

Иҫке ауыҙҙан был ниндәй яңы һүҙ, әллә яңылыш ишетәбеҙме тигәндәй, барыһы ла шаңҡыбыраҡ ҡалды. Сәбәбе ниҙә?.. Бәлки, ҡараштары үҙгәргәндер? Инәй бит, алтын һөйәк бит!

ҙа минең хәләлем? Булһамсы ҡанатлы ҡош... " - тигәне генә Тәлғәттең ҡолағына салынды һәм ул ныҡ тетрәнеп, хис-тойғоһо ҡуҙғып, бер инәнең зарыҡҡаны тураһындағы хикәйәтте иҫенә төшөрҙө.

* * *

Борон-борон заманда йәшәгән, ти, әбей менән бабай. Булған, ти, уларҙың дүрт балаһы. Һәйбәт кенә йәшәп ятҡанда, әбей ҙә, бабай ҙа ауырыша башлаған. Оҙаҡ та ятмай бабай донъя ҡуйған. Әбейе һаман ауырый ҙа ауырый, түшәктән ҡалҡып тороп ултырыр хәле юҡ. Инәләре шундай хәлдә булһа ла, дүрт балаһының, исмаһам, береһе уны ҡарамай, көнө-төнө уйнап тик йөрөй, ти. Ҡарсыҡ һыуһап, тамағы кибеп, бер тамсы һыуға зар булып ятҡанда ла, береһе-бер килеп хәлен белмәне, ти, дүрт моңһоҙҙоң.

Көн артынан көн үткән, әбейҙең хәле көндән-көн ауырайған. Бер көндө ул хәлһеҙ генә тауыш менән балаларын саҡырып алған да:

- Балаҡайҙарым, мин күп ятмам. Донъя үҙегеҙгә ҡалыр... Шуға тиклем һыу килтереп эсереп торһағыҙсы! - тигән, инәлеп.

- Мә, эс! - тип береһе бер сүмес һыу бирә лә, инәһен онотоп, йәнә уйынға тотона.

Көҙ етә. Инәй һаман зарығып түшәктә ята. Ҡоштар теҙелешеп йылы яҡтарға китә башлай. Шундай көндәрҙең береһендә ҡарсыҡ күккә ҡарап ята-ята ла: "Мин дә ошо

топ уйнап йөрөгән балаларының береһе, был хәлде күреп:

- Инәйебеҙ ҡош булып осто! - тип ҡысҡырып ебәреүгә, ҡалғандары ла иҫтәренә килә, ти.

- Инәй! Китмә, ҡалдырма беҙҙе! Мә һыу, мә һыу эс туйғансы!.. - тип, ҡайһыныһы сүмес, ҡайһыныһы күнәк тотоп инәләренең артынан йүгерҙе, ти. Инәләре туҡтаманы, ергә төшмәне, ти. Бары күк йөҙөнән:

- Һуң инде, балаҡайҙарым, бәхил булығыҙ! - тигән моңһоу тауышы ғына ҡайта, ти, балаларына.

Дүрт малай дүрт урында тәгәрәп йөрөп илаған, баштарын ташҡа бәреп, ҡанатып бөтә, ти. Тик бик тә һуң ине...

* * *

- Инәйҙәрҙең ҡәҙерен беләйек, ваҡытында беләйек. Аҙаҡ үкенмәҫлек булһын, үкенмәҫлек! - тип, Тәлғәт, Урал тауҙарына, күккә бағып оран һалды. - Инә бит - һөт имеҙгән, инә бит - им, инә бит - алтын ҡанат! Ғәйептәрем булһа, зинһар өсөн, кисер мине, инәй! Кисер, ҡәйнәм! Кисерегеҙ, туғандарым!

Үҙ инәһе, Тәлғәтте йәнендәй күргән инәһе, яман сирҙән алтмыш йәшенә лә етмәй мәрхүмә булғайны. Шуға ла ул ҡәйнәһе менән ҡайныһын инәһе-атаһы һымаҡ күрҙе, йыл һайын бесәндәрен дә сапты, эҫкерттәрен дә ҡойҙо, утындарын да ярҙы, бәрәңгеләрен дә алды, башҡа эш-йомоштарын да ихлас үтәне.

Кисерелгән хәл-ваҡиғаларҙы барлап, Тәлғәт тормош-йәшәйеш, яҙмыш тураһында тәрән уйға сумды. Тәҡдир, күрәсәк һәр кемгә, яҙмышҡа төшкән өлөш. Сәғирә ҡарсыҡ, уның туғандары, балалары, Тәлғәт өсөн дә. Әҙәм заты ғаләмдең, тәбиғәттең айырылмаҫ бер бөртөгө. Фани донъяла кеше яҡшылыҡ, яманлыҡ, ауырлыҡ менән дә һынап ҡарала, һынауҙар йәнде таҙалау өсөн ебәрелә. Әле һәммәһе лә һынау үтә кеүек.

Яҡшылыҡҡа, изгелеккә, мөхәббәткә ынтылған иманлы үә инабатлы кеше генә тормош йәмен тойоп йәшәй, күңел, рух бөтөнлөгөн һаҡлап ҡала. Был донъяға һәр кем үҙенең яҙмыш юлынан үтергә килә. Хоҙай Тәғәлә ҡөҙрәте менән тыуғанһың, ерҙә нәҫелдәштәрең менән йәшәйһең икән, рәхмәтле бул, изге ғәмәлдәр ҡыл, берҙе биш итеп ғәйбәт һөйләмә, ҡотҡо таратма, ата-бабаларыңдың, үҙеңдең ҡылыҡтарың өсөн дә яуап тотҡаныңды онотма. Бер нәмә лә тиктомалдан ғына булмай. Әммә ҡәрҙәштәр иң элек үҙҙәрен уйлап, был хәҡиҡәтте төшөнөп етмәй, көнитмештә, һәр кем белһә лә, етешһеҙлектәрен бар тип тә белмәй, кемдер фәһем өсөн булғанды асыҡтан-асыҡ әйтһә, үлә яҙып үпкәләй, уны ҡан дошман күрә башлай. Халыҡ һүҙенсә, ҡарға тиреҫтән - ем, яман әҙәм емдән тиреҫ эҙләй.

Бәхетле булыр өсөн әҙәм балалары үҙҙәрен һәр саҡ ыңғай яҡҡа үҙгәртергә, эстән алтын кеүек таҙа, башҡаларға бал кеүек шифа булырға, Илаһ ҡанундары буйынса ғүмер итергә тейеш. Тәлғәттең дә төп вазифаһы - кешеләрҙең йәнен таҙалау һәм һауыҡтырыу. Хоҙай биргән ҡөҙрәт, һәләт менән уларҙың рухи донъяларын киң, хис-тойғоларын саф итеү өсөн көрәшә. Һис шикһеҙ, иң бөйөгө - Хоҙай, артабан - инәй. Ожмахҡа юл инәйҙең аяғы аҫтынан үтә. Ошо олуғ хәҡиҡәткә инанып, әле Тәлғәт кешеләрҙең мең хәжәтен үтәр, яман һүҙҙәрҙән һаҡлар, ғәйептәрен кисерер, иртән-кисен рәнйетеүгә юл ҡуймаҫ, ғүмереңә бәрәкәт бирер Салауат Кәбирә доғаһын уҡый башланы һәм "Ҡәрҙәштәремдең, атам-инәмдең, туғандарымдың үә үҙемдең гонаһтарымды ғәфү әйлә. Амин. Амин. Амин." - тип тамамлап ҡуйҙы.

Нәҡ ошо мәлдә ниндәйҙер илаһи сың Ғәбиҙәне һиҫкәндерҙе. Үткәндә, ҡайтанан алып ҡайтам тигәндә, инәһенең: "Инде минең һеҙгә ни кәрәгем ҡалды?" - тигәне әле килеп йөрәген тағы бер тетрәтте, күҙҙәрен йәшләндерҙе. Ул медпунктҡа килгән, ҡулдарың йомшаҡ, имле, ауыртыу ҙа тоймайбыҙ, тигән рәхмәтле әбейҙәргә укол ҡаҙап бөттө лә, донъяһына ут ҡапҡандай, өйөнә йүгереп ҡайтты һәм йәһәт кенә машинаһын тоҡандырып, Нәрәлегә елдерҙе.

**(Аҙағы).**

*АФАРИН!*

# ӘКИӘТТӘ - ХӘҠИҠӘТ...

## әкиәтселә - киләсәк дилбегәһе

**(Башы 1-се биттә).**

"Ҡыҙғаныска күрә, беҙ күргәнде, тойғанды, кисергәнде, ишеткәнде телебеҙгә һалып, кинәнеп, ләззәтләнеп һөйләй белмәйбеҙ. Студенттар араһында был етешһеҙлек бигерәк һиҙелә. Башҡорт теле йөшәһен, тиһәк, уны мотлаҡ телмәргә һалырға тейешбеҙ. Был маҡсатты тормошҡа ашырыуҙа әкиәттән дә уңышлыраҡ жанр юҡ, сөнки ул балаларҙың халыҡ ижадындағы иң яраткан жанры ла. Ошо йәһәттән ҡарағанда, бәйгенең телде һаҡлап ҡалыуҙағы әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ", - тигәйне "Һаумы, һаумы, әкиәт!" конкурсының башланғысында тороусыларҙың береһе, баһалама ағзаһы, языусы Рәсимә Ураҡсина. Уның был һүҙҙәрен ҡатнашыусылар араһында тәмләп тороп әкиәт һөйләүселәрҙең, бигерәк тә малайҙарҙың артыуы үҙе үк раҫлап тора. Арабыҙҙа бәләкәй генә Хужа Насретдиндар, Алдар, Ерәнсә сәсәндәр туп-тулы, имеш.

- Асылда, бөтөн донъя халыҡтары әкиәттәрендәге уртаҡлыҡ нигеҙенә, Ер йөҙөндә халыҡтар берҙәм булһын, тигән идея һалынған. Бөгөнгө тарҡаулыҡ мәлендә кескәйҙәрҙең әкиәттәрҙе тергеҙеүе ифрат та ҙур, хатта сәйәси мәғәнәгә эйә, тип әйтер инем. Беҙ бөгөн ете юл сатында торабыҙ, әммә боронғо әкиәттәрҙә һүрәтләнгән кеүек, беҙҙең алдыбыҙҙа таш та, "Уңға китһәң - уңырһың, һулға китһәң - туңырһың", тигән яҙыу ҙа юҡ. Шуға ла әкиәтте күңел асыу сараһы итеп кенә ҡабул итергә ярамай, әкиәттә хәҡиҡәт бар, уның төбөндә тәрбиәүи мәғәнә ята. Балалар әкиәт ярата, уны үҙҙәре лә һөйләй икән, киләсәктә улар ҙан хыялға бай ижади быуын үҫеп етер. Йәмғиәт өр-яңынан тыуғандай булыр, улар яныса фекерләй торған кешеләр булыр һәм беҙҙе дөрөҫ юлдан алып китер, - тип, бәйгенең баһалама рәйесе Әхмәт Сөләймәнов бәләкәй сәсәндәрҙең иненә ҙур бурыс йөкмәтеп, күңеленә ғәм орлоҡтары һалып та ҡуйҙы.

Ә балаларҙың үҙҙәренә әкиәттәрҙең тылсымы, изгелектең яуызлыҡтан өҫтөн тороуы ныҡыраҡ оҡшай булып сыҡты. Күңелендә әкиәт тылсымы йәшәгән, яҡшылыҡты барлыҡ төшөнсәләрҙән юғарыраҡ ҡуйған бала донъяны ла матурыраҡ итергә, үҙе лә изгелеккә тартыласағына шик юҡ, сөнки әкиәттәрҙең әле насар тамамланғаны юҡ.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**"Һаумы, һаумы, әкиәт!" донъя халыҡтары әкиәттәрен башҡорт телендә һөйләүсе йәш әкиәтселәрҙең III төбәк-ара бәйгеһенең еңеүселәре түбәндәгесә билдәләнде: III урын - Әҙилә Шакирова (Борай районы Ҡайынлыҡ урта мәктәбе), Элина Данилова (Ғафури районы Яугилде ауылы мәктәбе), II урын - Ғайсар Рәхмәтуллин (Баймаҡ районы Иҫке Сибай мәктәбе), Илгиз Шәйәхмәтов (Магнитогорск ҡалаһы), I урын - Алһыу Мостафина (Учалы районы Ураҙ лицейы), Сулпан Рөстәмханова (Илеш районы Үргә Маншир ауылы мәктәбе). Гран-приға Ҡыйғы районы Ибрай мәктәбенең 5-се синыф уҡыусыһы Нурия Зәйнуллина менән Ҡырмыҫҡалы районы Түбәнге Төкөн мәктәбенең 4-се синыф уҡыусыһы Илмир Бикҡужин лайыҡ булды.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*

# НАУРЫҘ, НАУРЫҘ...

## именлек һәм шатлыҡ килтер



**Баш ҡаланың Якутов исемендәге ял паркында төрки һәм иран телле халыҡтарҙа яҙғы көн һәм төн тигеҙләшкән ваҡытта билдәләнә торған Науруҙ байрамы булып үтте. Борондан ҡалған ышаныуҙар буйынса, был көндә ни тиклем күңелле һәм шат уҙғарһың, йылың да уңышлыраҡ һәм байыраҡ буласаҡ.**

Республикала ун өсөнсө тапҡыр үткәрелә килгән, хәҙер инде был сараны үткәреү буйынса арыу ғына тәжрибә лә тупланылған булыуын билдәләп, республика мәҙәниәт министры вазифаһын башҡарыусы Камилә Дәүләтова шулай тине: "Науруҙ - берҙәмлек, яҙ һәм мөхәббәт байрамы. Ындай байрамдар төрлө милләт мәҙәниәттәре менән танышыу, уларҙы баһалау, аралашыу мөмкинлеге бирә һәм халыҡтарҙы берләштереүсе булып сығыш яһай".

Байрамдың маҡсаты изге. Шуға ла республикала йәшәүсе төрки халыҡтар вәкилдәре уны йыл да көтөп ала, ныҡлап әҙерләнә. Күргәҙмәгә ҡуйыу өсөн милли ашһыуын, халыҡ кәсептәре өлгөләрен, милли костюмдарын тегеп әҙерләп ҡуя. Был йәһәттән үҙебеҙҙең Баймаҡтар, Ғафуриҙар барыһынан да уҙҙыра, уларҙың тирмәләренән, күргәҙмәләре эргәһенән халыҡ аяғы өҙөлмәй.

- Науруҙға өсөнсө тапҡыр киләбеҙ, - ти "Темәс" башҡорт тарихи-мәҙәни үҙәге директоры Нур Ҡолмырҙин. - Ҡунаҡтарҙы матур тирмәбеҙҙә башҡорт милли аштары һәм әсемлектәре менән һыйланыҡ, төрлө ҡул эштәрен күрһәттек. Шулай уҡ "Ғилмияза" фольклор төркөмөнөң сығышы ла байрамға йәм өҫтәне. Байрам йылдан-йыл күркәмләнә бара, ойоштороу кимәле лә яҡшыра. Артабан да Науруҙа ҡатнашырға иҫәп тотабыҙ, сөнки тамырҙары менән быуаттар төпкөлөнә барып тоташҡан был байрам рухи көс биреүсе, быуындар күсәгилешлеген тәьмин итеүсе һәм милли йолаларҙы һаҡлаусы булараҡ ҙур әһәмиәткә эйә.

Байрамға килеүселәр Ғафури районының "Сәйетбаба" тарихи-мәҙәни, Р.Ғамзатов исемендәге Дағстан мәҙәни-милли, И.Сомани исемендәге таджик милли мәҙәниәте үҙәктәренең күргәҙмәләре менән танышты. Халыҡ кәсептәре оҫталары Суфия Әсәнова (Баймаҡ), Рәбиға Йәрмиева (Ғафури) һәм Мортаза Солтанғолов (Федоровка) эштәре лә ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. 20 йылдан ашыу балаҫ һуғыу менән шөғөлләнгән Рәбиға апай теләүселәргә шунда уҡ оҫталыҡ дәрестәре лә бирҙе. Сара республиканың үҙешмәкәр һәм профессиональ артистар ҡатнашлығындағы ҙур концерт менән бергә үрелеп барҙы. Шулай уҡ көрәш һәм башҡа төрлө спорт саралары ла уҙғарылды.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Байрамға килеүселәр араһында төрлө милләт йәштәренең һәм балаларҙың күп булыуын иҫәпкә алғанда, Науруҙдың йәш быуында ла ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырған байрам икәнлеген аңларға була. Ә үҙ йолаларына битараф булмаған быуындың бөгөнгөһө лә ныҡ, киләсәге лә ышаныслы.**

**Наҙгөл САФИУЛЛИНА.**

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

# АҪЫЛ СИФАТТАРЫБЫҘ...

## кәртә булмаһын

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө енел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



**Зилә РӘХМӘТУЛЛИНА, философия фәндәре кандидаты:** Милләттең яҙмышы уның менталитетына бәйле. Аҫыл сифаттарыбыҙ күп беҙҙең. Һуғыш ҡупҡанда, экстремаль хәлдәр тыуғанда батырлыҡ ҡалҡып сыға, ҡурҡыу тойғоһо юғала. Ғөмүмән, элек күсмә тормош менән йәшәгән халыҡтарға ҡурҡыу тойғоһо хас түгел. Шул уҡ ваҡытта беҙҙә тыйнаҡлыҡ сифаты ла бик көслө. Тыйнаҡлыҡ һүҙен рус теленә теүәл генә тәржемә итеп тә булмай. Мәғәнәһе киң. Ләкин иң боронғо осорҙан ҡандан-ҡанға күсеп килгән был аҫыл сифатыбыҙ хәҙерге заманда беҙҙең өсөн ниндәйҙер кәртә лә булып тора һымаҡ. Башҡорт милләтле студенттарымдан ғына сығып әйтәм: теманы белһәләр ҙә, дәрестә белемдәрен күрһәтеп бармайҙар. Был ата-әсә тәрбиәһе. Бала берәй ҡырын эш эшләнә, уны әрләп ташлайбыҙ, оялтабыҙ. Әҙәпле булып үҫһен ул, әммә үҙ-үҙен күрһәтә лә белһен. Үтә тыйнаҡлыҡ арҡаһында үҙ мәҙәниәтебеҙгә реклама яһамайбыҙ. Башҡорт балы, башҡорт аты кеүек брендтарыбыҙҙы бар сағыулығында күрһәтеү етмәй. Йәғни беҙҙең йөкмәткебеҙ бар, әммә шул йөкмәткегә тап килгән форма юҡ. Тыйнаҡлыҡ бөгөн күп осраҡта ышаныһыҙлыҡҡа, үҙ баһаңды төшөрөүгә әүерелә. Яҡут, тыва кеүек башҡа төрки халыҡтарына күҙ һалығыҙ, улар бит үҙҙәрен шул тиклем ышаныслы тота.

Боронғо халыҡ булараҡ, беҙ абсолют категорияларҙан сығып, йыһан кинлегендә фекер йөрөтөп эш итәбеҙ. Шуға күрә тормош ығы-зығыһы, аҡса эшләү беҙгә мәғәнәһеҙ шөғөл кеүек тойола. Был сифатыбыҙ хатта тышҡы ҡиәфәтебеҙҙә, ниндәй кейем кейеп йөрөүебеҙҙә лә сағыла. Ғәҙәттә, арзаныраҡ, әммә уңайлыраҡ кейем һайларға тырышабыҙ бит.

Бөгөнгө типик башҡортҡа интроверт булыу хас, йәғни күбебеҙ үҙ күңел донъяһында йомолоп йәшәй. Был хатта нисек иҫәнләшеүебеҙҙән дә күренә. Күбебеҙ таныш кешене күрһәк тә, күрмәмешкә һалышып үтеп китәбеҙ. Үҙ эске донъябыҙҙы шулай һаҡлап ҡалырға тырышыуҙан был. Башҡа халыҡтар менән сағыштырығыҙ, улар һине күреп ҡалһа, әллә ҡайҙан иҫәнләшә, өҫтәүенә, йылмайып, комплимент эшләп ташлай. Ә бит статистика буйынса, нәҡ башҡаларға оҡшай белгәндәр күберәк уңышҡа өлгәшә. Күңелебеҙ иреклеге беҙгә башҡалар енел генә үткән социаль, бюрократик кәртәләрҙе йырып сығырға ҡамасаулай. Түбәнге, традицион аңыбыҙ быны кәмһетелеү тип ҡабул итә.

Беҙҙә һаман да коллективлыҡ сифаты көслө. Йәғни, бөтәһе лә бер тигеҙ йәшәргә тейеш, тигән фекерҙәбеҙ. Быны ни өсөн уңышҡа өлгәшкән милләттәшебеҙҙе яратып еткермәйбеҙ, үҙебеҙгә тиң ҡан-кәрҙәшкә генә ярҙам ҡулы һуҙырға әҙербеҙ, һине уҙып китә алырлыҡ булһа, ярҙам итеүҙән баш тартабыҙ.

Әлбиттә, менталитетты үҙгәртеүе бик ҡыйын, әммә беҙ мотивтарыбыҙҙы үҙгәртә алабыҙ. Шул ваҡытта эш-ҡылыҡтарыбыҙ ҙа үҙенән-үҙе үҙгәрәсәк. Әгәр ҙә, мәҫәлән, еребеҙгә хужа булып ҡараһаҡ, үҙебеҙҙе хужаларса тотасаҡбыҙ ҙа. Үҙ ирекле гендә түгел, ә халыҡ ирекле ген уйлап эш иткәндә, әллә ниндәй ауырлыҡтарҙы үтергә була. Халҡыбыҙға ярҙам итәбеҙ тиһәк, телевидение, башҡа матбуғат саралары аша алдынғы, замандса башҡорт образын тыуҙырып, шул образды пропагандаларға кәрәк.

**Мөнир ИҠСАНОВ яҙып алды.**

✓ ***Көлөү кешенең ғүмерен оҙайта. Позитив кешеләр эштә лә, эргәһендәге кешеләр менән аралашыуҙа ла күберәк уңышҡа өлгәшә. Көлөү - иммун системаһын көйләй, адреналин һәм допамин бүленеп сығыуға булышлыҡ итә.***



*ИНТЕРНЕТТАН*



# ИММУН СИСТЕМАҺЫН...

## көлөү ҙә нығыта

■ Ҡайһы бер гүзәл заттарҙың ДНК-һында йәш көйөнсә һаҡланыу мөмкинлеге биргән гендар бар. Тап ошо гендар уларға гел йәш күренергә генә түгел, ә 45 йәштән һуң да бала табырға ярҙам итә. Иерусалимдың "Адаса Эйн-Керем" дауаханаһы медиктары һәм Йәһүд университеты тикшеренеү үткәргәндә 45 йәштән һуң ауырға ҡалыуға өлгәшкән ҡатын-ҡыҙҙарҙың ДНК-һын 30 йәшкә тиклем бала тапҡан ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡы менән сағыштырып ҡараған. Баҡтиһәң, был ике төркөмдәге ҡатындар 60 ген менән айырыла. Был гендарҙың етәүһе оҙон ғүмерле булыу менән бәйле һәм уларҙың барыһы ла оло йәштәге әсәйҙәрҙә осраған. Шул иҫәптән, был ҡатындарҙа оҙағыраҡ ҡартайырға булышлыҡ итеүсе гендар ҙа булған. Лаборатор йәнлектәрҙә үткәрелгән тикшеренеүҙәр ғалимдарҙың фекерен раҫлаған.

■ Аҙнаһына бер генә ус eләк-емеш ашау Паркинсон ауырыуынан һаҡлай ала, ти Гарвард һәм Көнсығыш Англия университеттары эксперттары. Ғалимдар 20 йыл дауамында 130 мең кешене тикшергән, ошо ваҡыт эсендә уларҙың 800-өндә Паркинсон ауырыуы күҙәтелгән. Белгестәр уларҙың туҡланыу рационы һәм сирҙәре араһында бәйләнеш тапҡан һәм ауырыуҙар исемлегендә флавоноидтарға бай eләк-емеште аҙ ҡулланыуын асыҡлаған. Был матдәләргә бай аҙыҡты күп ҡулланыусылар Паркинсон ауырыуы менән 40 процентҡа һирәгерәк ауырыған. Аҙнаһына бер ус eләк ашау ҙа ҡартая барыусыларҙың баш мейеһе зарарланыу ҡурҡынысын 25 процентҡа түбәнәйтә. Бынан тыш, рационға eләк-емеш индереү ҡан баҫымын нормаға килтерергә, йөрәк эшмәкәрлеген яҡшыртырға, яман шеш булдырмаҫҡа ярҙам итә.

■ Британияның спорт журналы хәбәр итеүенсә, ултырып эшләү гипертонияға һәм диабетҡа килтереүе ихтимал. Бөгөн күп кешеләр 9-ар сәғәт буйына офиста ултыра, машинала йөрөй, һөҙөмтәлә, калориялар кәрәгенсә ҡулланылмай, аяҡ һәм арҡа мускулдары хәрәкәтләнмәй, метаболизм яйлана, умыртҡа бағанаһы һығылмалығын юғалта. Былар барыһы ла арҡа ауыртыуына, ҡан әйләнешенең насарайыуына килтерә, үпкәләр тулы ҡеүәтендә эшләмәү сәбәпле, организмға кислород етмәй башлай. Әгәр ҙә эштә көнө буйы ултырырға тура килһә, эшкә йәйәү йөрөргә, спортзалда шөғөлләнергә кәңәш итә табиптар.

■ Клиник тәжрибә күрһәтеүенсә, көлөү кешенең ғүмерен оҙайта. Позитив кешеләр эштә лә, эргәһендәге кешеләр менән аралашыуҙа ла күберәк уңышҡа өлгәшә. Көлөү - иммун системаһын көйләй, адреналин һәм допамин бүленеп сығыуға булышлыҡ итә. "Ул шулай уҡ эндорфин һәм энкефалин бүленеү механизмын әүҙемләштерә, - тип билдәләй Милландағы Fatebenefratelli психология фәндәре департаменты Клаудио Менкаччи. Шул уҡ ваҡытта статистика күрһәтеүенсә, хәҙерге заман кешеһе ата-бабаларына ҡарағанда һирәгерәк көлә. Corriere della Sera гәзите үткәргән һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, 50 йыл элек кеше көнөнә уртаса 15 минут көлһә, бөгөн быға 5 минут ваҡытын бүлә.

■ Етен орлоғо кеше, бигерәк тә ирҙәр организмы өсөн файҙалы. Айова дәүләт университеты эргәһендәге Тикшеренеү үҙәге ғалимдары әйтеүенсә, етен орлоғо ҡандағы холестерин кимәлен түбәнәйтә. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, етен орлоғонда булған химик матдә - лингнин ҡатын-ҡыҙҙар ҡаны торошон бер нисек тә үҙгәртә алмай икән. Ғалимдар быны лингнин тәьҫиренә тестостерондың йоғонтоһо менән аңлата. Ирҙарға көнөнә 3 ҡалаҡ етен орлоғо ҡабул итеү холестерин тупланыуын 10 процентҡа түбәнәйтергә мөмкинлек бирә.

*ӘЙҘӘ, БАҠСА ҮҪТЕРӘЙЕК!*

# КӨНБАҒЫШТАН...

## йорт һал



**Бөгөн беҙҙең рубрикала Ҡырмыҫҡалы районы Сахай ауылында йәшәүсе Лариса Урал ҡыҙы Яманһарова баҡса үҫтереүҙең ҡайһы бер серҙәре менән уртаҡлаша. Ул һәм ҡыҙ тәрбиәләүсе әсә һәм балалар баҡсаһында тәрбиәсе булараҡ, ул балалар менән бергә баҡса үҫтереүҙең файҙалы яҡтары тураһында һөйләйәсәк.**

- Ирем менән Өфө ҡалаһында эшләп, шул ҡалала ғаилә ҡороп йәшәһәк тә, балалар үҫтергәндә ауыл еренең күпкә уңайлыраҡ һәм ҡулайлы булыуын иҫәпкә алып, ауылда йорт төҙөнөк. Ауыл ере кешенән уңғанлыҡ талап итә, йорт тирәһендә баҡса үҫтермәгән кеше бында бик һирәктер. Шуға мин дә яйлап баҡса үҫтереү серҙәрен үҙләштерәм, был эшкә бәләкәйҙән балаларҙы ла ылыҡтырам. Әгәр ҙә балағыҙҙың үҙаллы һәм хеҙмәт яратҡан кеше булып үҫеүен теләһәгеҙ, бынан да яҡшыраҡ ысул юҡтыр ҙа. Үҙеңдең баҡсаңда, тәбиғәт менән тығыҙ бәйләнештә баланы тырышлыҡҡа, хеҙмәткә, түҙемлеккә, аҙаҡҡы һөҙөмтә өсөн яуаплылыҡҡа өйрәтеп була. Ер йылынып еткәс тә бергәләшеп яҙҙың тәүге үҫемлектәре - редис, әнис (укроп), петрушка сәсегеҙ, улар өлгөрөп еткәс, баланың шатлығының сиге булмаясаҡ, үҙе менән ғорурланып йөрөйәсәк.

Шулай уҡ гәзит уҡыусылар менән тағы ла бер нисә ҡыҙыҡлы идея менән уртаҡлашмаҡсымын. Көнбағыш сәскәһе - бик матур үҫемлек. Уны һәр бала үҫтерә ала. Бының өсөн артыҡ хеҙмәт тә талап ителмәй, ерҙе соҡоп орлоҡ һалырға һәм уны артабан күҙәтергә генә ҡала. Көнбағыштың ҙур итеп сәскә атыуы, уның ҡояш артынан башын бороуы, сәскә таждарында ҡыҙынған ҡырмыҫҡалар, эргәһендә осоп йөрөгән бал ҡорттары, көнбағыш орлоҡтарының барлыҡҡа килеүе - һәр береһе ҡыҙыҡлы бер донъя. Ярыш ойоштororға ла була: кем - көнбағышмы, әллә баламы, йәй эсендә бейегерәк булып үҫер икән? Шулай уҡ көнбағыштан йорт эшләргә була. Бының өсөн орлоҡтарҙы 10 см аралыҡ ҡалдырып, түңәрәк формаһында сәсегеҙ. Улар 1,5 м бейеклеккә еткәс, бергә тоташтырып бәйләргә генә ҡала. Алдан ишек урыны ҡалдырырға онотмағыҙ. Әйткәндәй, баҡсасылар әйтеүенсә, түңәрәк формаға сәселгән үҫемлектәр яҡшыраҡ үҫә. Түңәрәк - ул үҙе серле һын, уның уртаһы бөтмәҫ көс бирә торған, дөйөм үҫешкә ыңғай йоғонто яһай торған урын. Көнбағышты үрмәләп үҫкән башҡа сәскәләр менән ҡатнаштырып ултыртырға була. Был балаға төрлө үҫемлектәрҙең нисек бергә йәшәүен күҙәтергә мөмкинлек бирәсәк. Үрмәләп үҫеүсе төрлө үҫемлектәрҙән ҡыуыш эшләргә мөмкин. Бала уны уйындарҙа әүҙем ҡулланасаҡ.

Ғөмүмән, балалар менән баҡсала тағы әллә күпме ҡыҙыҡлы идеяларҙы тормошҡа ашырырға була. Барыһы ла баланың йәше һәм баҡса биләгән майҙандың ҙурлығына бәйле. Беҙ был эштә яңы кешеләр, шулай ҙа гәзит уҡыусыларҙы ошо мауыҡтырғыс шөғөлгә ҡыҙыҡһыныу уята алғанбыҙҙыр, тип уйлайым. Иң мөһиме, хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен күҙәтергә онотмағыҙ.

*ҺОРАҒЫҘ...*

### Олондо ағартам...

**"Алмағастарҙың олонон ағартыу өсөн эзбиз иҙелмәһе урынына һатыуҙа булған һыу эмульсиялы буяу ҡулланырға яраймы? Белеүемсә, был буяу оҙаҡ йыуылмайынса һаҡлана.**

***Сәриә, Өфө ҡалаһы".***

Емеш ағастары олонон ағартыу өсөн был буяуҙы ҡулланырға тәҡдим ителмәй. Белгестәр әйтеүенсә, уның ағас ҡайырыһының тере туҡымаһына зыян килтереүе ихтимал. Уның урынына ВС-511 махсус һаҡлаусы буяу ҡулланырға була, был буяу төрө ғилми учреждениелар тарафынан уйлап табылған. Буяу олон өҫтөндә атмосфераға бирешмәүсе, әммә һауаны яҡшы үткәреүсе ҡатлам барлыҡҡа килтерә. Бынан тыш, ул ағасты сысҡан кеүек кимереүселәрҙән һәм ҡуяндарҙан һаҡлаясаҡ. Әммә был буяуҙы һатыуҙа табыуы ауыр, шуға баҡсасылар өсөн иң ҡулайлы һәм осһоҙло ысул булып һаман да эзбиз ҡулланыу ҡала. 10 литр һыуға 2-3 килограмм яңы һүндерелгән эзбиз һәм 1-2 килограмм балсыҡ һалығыҙ. Ул ағасҡа яҡшы ятһын өсөн ошо ҡатнашмаға 2 литр самаһы айыртылған һөт йәки 50-100 грамм йылытылған столяр елеме өҫтәргә була. Шулай уҡ ағас олонон ағартыу өсөн 10 литр һыуға 2-3 килограмм эзбиз һәм 0,5 литр баҡыр купоросы өҫтәп болғатырға мөмкин.

### Һырғанаҡ ултыртам...

**"Апрель айы һырғанаҡ ултыртыу өсөн иң ҡулай ай, тиҙәр. Был үҫентене нисек дөрөҫ ултыртырға?**

***Ришат, Йылайыр районы".***

Ысынлап та, был ҡыуаҡты яҙын ҡаҙып алалар һәм яҙын ергә ултырталар. Һырғанаҡ яҡты, һауа яҡшы алышынып торған, ундырышлы, артыҡ тығыҙ булмаған урынды ярата. Әгәр ҙә үҫемлек ошоларҙың барыһын да иҫәпкә алып ултыртылһа, бер ҡыуаҡтан 20 килограмдан ашыу емеш йыйып алырға мөмкин. Һырғанаҡ ултыртыла торған ер тығыҙ булһа, соҡорға ҡом, ваҡ таштар (төҙөлөш сүп-сары, кирбес онтаҡтары һ.б.) өҫтәргә кәрәк. Был тупраҡҡа һауа яҡшыраҡ үтеп инһен өсөн кәрәк.

Ҡыуаҡ ултыртыла торған соҡор 40-50 см тәрәнлектә, 70-80 см диаметрҙа булһын. Унда шулай уҡ 300 грамм фосфор һәм башҡа органик ашламалар индереп, тупраҡ менән яҡшылап болғатырға кәрәк. Баҡсасылыҡ буйынса төрлө әҙәбиәттә һырғанаҡты тәрәнерәк ултыртыу яҡшыраҡ, тигән фекер таралған. Әммә белгестәр әйтеүенсә, был осраҡта үҫентеләр йышыраҡ һәләк була. Ергә ултыртыр алдынан һырғанаҡтың тамыр системаһын яҡшылап ҡарап сығып, һынған тамырҙарын алып ташларға, яраларын осло бысаҡ менән таҙартып, балсыҡ иҙелмәһенә тығып алырға кәрәк.

*МИНЕҢ ТӘЖРИБӘМ*



# ЕЛӘК ҮҪТЕРЕҮ СЕРҘӘРЕ

**Өс йыл элек, яңыртып ебәреү өсөн, баҡса еләген ике урынға ултыртҡайным. Береһен тәрбиәләп, йышлап китмәһен өсөн мыйыҡтарын ҡырҡып, араларын йомшартып торҙом. Икенсе түтәлгә ҡул етмәгәс, балаҫ кеүек булып үҫте. Шулай ҙа унда сүп үләне үҫтермәй утап, һыу һибеп торҙом.**

Былтыр ошо "балаҫ"тан теге түтәл менән сағыштырғанда 3-4 тапҡырға күберәк eләк алдым. Ошондай уҡ хәл балаларым бәләкәй саҡта бер булғайны. Хатта eләктәрен гел ҡарап торған күршем үпкәләп йөрөгәйне. Ул саҡта эш eләктәрҙең сортында йәки тупраҡтың ундырышлы булыуындалыр, тип уйлағайным. Улай түгел икән шул. Йыш үҫкән түтәлдә eләктәр ҡоро йылда ла бер-береһенә ышыҡ булып, артыҡ бирешмәй. Ә айырым-айырым ултырғандарының тамырҙары өҫтә булғас, тиҙ генә ҡорой башлай.

Үҙемдең тәжрибәмдән сығып, мин шундай һығымта яһаным, ә һеҙ үҙегеҙ ҡарағыҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар. Сортына килгәндә, минең eләктәремдең күбеһе - "Фестивальная".

Виктория еләген - биш, ә ҡурай еләгенең 8-9 йыл һайын урындарын алыштырып торам. Улар өсөн элек һарымһаҡ, әнис йәки бәйғәмбәр тырнағы сәскәһе үҫкән урынды һайлайым. Был урындарҙа ҡоротҡостар булмай. Ерҙе йомшартып, янған тиреҫ, минераль ашламалар, әҙ генә эзбиз индереп, сүп үҫтермәй тырматып торам. Ҡурай еләген сентябрь аҙағында, бик өлгөрмәй ҡалһам, иртә яҙ ултыртам. Ҡурай еләге үгәй инә үләне үҫергә яратҡан урындарҙы үҙ итә. Хәлдән килгәнсе көҙҙән күп итеп һыу һибеп ҡалдырам, шунан улар сәскәгә тумалана башлағас, һыу һибәм. Уңышын йыйып алғансы һыу һибеп торһаң, ҡурай еләге күберәк була. Баҡса еләге лә һыу ярата. Викторияны һыуыҡтар төшмәҫ элек тамыры нығынып өлгөрөрлөк итеп ултыртам. Әгәр йәй күсереп өлгөрмәһәм, сентябрҙә ултыртам. Ҡояш та үтә ҡыҙҙырмай, ямғырҙар ҙа йышыраҡ яуа, шуға улар бик яҡшы ғына үҫеп китә.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

✓ Ата-әсә йыш ҡына ни өсөн балаһының насар үҫеүенә аптырай. Ә әсә кеше уға: "Ашамаһаң - үҫмәйһең", - тигән дә онотҡан. Ә бала өсөн был программа булып тора.



ӘЙҘӘ, СӘЛӘМӘТ БУЛАЙЫҠ!

**Сәләмәт кешеләр менән сәләмәтлек тураһында һөйләшеп, уларҙың фекерен, фәһемен башҡалар күңеленә лә күсерергә уйланыҡ. Гәзит уҡыусыларыбыҙҙың үҙҙәрен дә был һөйләшеүҙә ҡатнашырға саҡырабыҙ. "Үҙеңде сәләмәтмен тип иҫәпләйһеңме һәм быға нисек өлгәшәһең?" тигән һорауыбыҙҙы был юлы журналист Гәзиз ЙОСОПОВҡа төбәнек.**

# МАЙ ҮРМӘҺЕН...

## эсеңә лә, мейеңә лә



- Аллаға шөкөр, бөтөн ағзаларым теүәл, камил, аяҡ-ҡулдарым урынында, аҡылым айыҡ, күҙҙәрем күрә. Үҙемде һау-сәләмәтмен тип иҫәпләйем. Һаулығымды нығытыу һәм бер рәүештә тотоу өсөн көн һайын иртән һалҡын һыу менән ҡойонам. Ҡара яҙҙан ҡара көҙгә тиклем йортобоҙ эргәһендә урынлашҡан М. Кәрим исемендәге Башҡорт ҡала гимназияһының стадионында йүгерәм. Һүҙ ыңғайы шуны ла әйтеп китергә кәрәк: бында йыл һайын нимәлер уйлап сығарып ҡына торалар, быйыл, ҡышын, мәҫәлән, стадионда бушлай һырғалаҡ эшләне. Ҡышын иһә спортзалға йөрөйөм, волейбол менән шөғөлләнәм.

Һалҡын һыу менән ҡойоноуым нисек башланды? Ул ваҡытта мин Баймаҡта, ағайымдарҙа, Истамбул университетының магистратураһына имтихандар тапшырырға әҙерләнә инем. Яҙ. Ә беҙҙә яҙ нисек булғанын беләһегеҙ бит инде: бер көн ҡояш йылмая, иртәгәһенә ҡар яуып, буран сығыуы ла ихтимал... Ҡыҫҡаһы, ағайым үҙе көн дә иртән һалҡын һыу менән ҡойона. Ишек алдына махсус таш килтереп ҡуйған. Бер көн мине лә һөйрәкләп алып сыҡты ла ҡойондорҙо. Бер ауырлығы ла юҡ икән уның: тышта минус 15 градус, ә һыу 0 градус. Һуңынан хатта йылы булып китте. Шунан башлап был иртәнге процедураны ҡалдырғаным юҡ. Ғөмүмән, һыу процедуралары оҡшай, йөҙөргә яратам. Хәҙер кәләшем ҡыҙымды ла бассейнға йөрөтә. Спорт ғаиләһе тиергә лә мөмкин беҙҙе. Милләттәр кросында ла ҡатнашабыҙ. Ҡыҙым бер саҡырымды минең елкәлә ултырып "йүгереп" тә үткеләй.

Халҡыбыҙҙы бөгөн нәмә бөтөрә? Никотин һәм алкоголь. Беҙ өйөбөҙгә бер тамсы хәмер индергәнебеҙ юҡ, тәмәке тартыуҙы ла ташланым. Айыҡлыҡ үҙенән-үҙе халыҡты ла, айырым кешене лә тергеҙмәй, шул уҡ ваҡытта үлергә лә бирмәй, тиер инем. Тергеҙеү өсөн ныҡлап спорт менән шөғөлләнергә кәрәк. Спорт, ғаилә, хеҙмәт - бына ошо өс тағанды нигеҙ итеп алыу зарур. Юҡһа, ҡайһы берәүҙәр юғары уҡыу йортон тамамлай ҙа, артабан белемен камиллашыу тураһында уйлап та ҡарамай, спорт тураһында әйтеп тә тораһы түгел. Һөҙөмтәлә эскә генә түгел, мейегә лә май үрә. Ә спорт нимәһе менән яҡшы: ул үҙ-үҙеңде еңергә саҡыра, ихтыяр көсө тәрбиәләй. Ихтыяр көсө булған кеше насар ғәҙәттәрҙән азат була. Миҫал өсөн әллә ҡайҙа йөрөргә кәрәкмәй, данлыҡлы яҡташыбыҙ Ирек Зариповты ғына алайыҡ. Халыҡ әйтмешләй, яҡшы хужа этен дә урамға сығармаҫтай көндәрҙә лә үҙ-үҙеңде еңеп йүгерергә сығырға йәки һалҡын һыу менән ҡойонорға иткәндә күңелегеҙҙә икеләнеү тойғоһо тыуһа, Ирек Зариповтың шәхси тарихын иҫләгеҙ ҙә - алға!

**Земфира ХӘБИРОВА яҙып алды.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Аң тәбиғәте: бығаса булмаған суперярҙам

5. Яҡшы тормошҡа төп асҡыс булып үҙаңыңды үҙгәртеү тора. Беҙҙең үҙаңыбыҙ мейе аша үткәргән уйҙағы картиналар менән билдәләнә. Әгәр беҙ ошо образдарҙы йәки картиналарҙы үҙгәртеп, уға тормошта нимә кәрәк икәнлеген күрһәтһәк, үҙаңыбыҙ тамырынан үҙгәрәсәк. Был үҙ-үҙебеҙгә ышанысты һәм көсөбөҙҙө арттырасаҡ. Ул ваҡытта маҡсатығыҙға еңел өлгәшәсәкһегеҙ һәм ғәҙәти булмаған нәмәләр ғәҙәтигә әйләнәсәк.

6. Әгәр һеҙ нимәгәлер ышанһағыҙ һәм намыҫлы, ғәҙел итеп уға өлгәшергә ынтылһағыҙ, ошо йүнәлештәге ныҡышмал ғәмәлдәр һеҙгә теләгегеҙҙе тормошҡа ашырырға ярҙам итер. Хыялығыҙҙы һәр саҡ уйығыҙҙа ғына күҙ алдығыҙҙа тотоғоҙ. Был хаҡта үҙ алдығыҙға ғына көн һайын даими ҡабатлағыҙ. Хыялығыҙға һеҙҙе ташлап китергә ирек бирмәгеҙ. Әгәр бығаса йоҡоға талған барлыҡ аҡыл, физик энергияғыҙҙы бер маҡсатҡа йүнәлтһәгеҙ, улар һеҙҙең өсөн эшләй башлай. Бөйөклөктөң сере шунда: үҙегеҙҙең яратҡан нәмәгеҙҙе табып, барлыҡ ваҡытығыҙҙы шуға бағышлағыҙ. Бер аҡыл эйәһе былай тигән: "Әгәр ысынлап яратҡан нимәлер тапһағыҙ һәм тап шуның менән шөғөлләнергә теләһәгеҙ, тормошта бер көн дә көсөргәнергә тура килмәйәсәк". Һеҙгә ҡарағанда аҙыраҡ мөмкинлеккә эйә кешеләр был тормошта күберәккә өлгәшкәнен хәҙер аңланығыҙмы?

7. Ылыҡтырыу ҡануны аңдың өҫтөнлөклө ҡануны булып тора. Нимә тураһында уйлайһығыҙ, нимәгә ышанаһығыҙ, шул һеҙҙең тормошоғоҙҙоң бер өлөшөнә әйләнәсәк. Бәхетле һәм дәлилле булған кешеләр үҙ донъяһына тап шундай кешеләрҙе йыя. Суперярҙам көткән ыңғай ҡарашлы кешеләр теләктәренә ирешергә ярҙам иткән уңайлы мөмкинлектәрҙе ылыҡтырып, тартып торасаҡ.

8. Бөтөн тормошоғоҙ һуҙымында аҫҡы аңығыҙ мөһим роль уйнаясаҡ. Һеҙ уны максималь ҡаҙанышҡа өлгәшеү өсөн файҙаланырға өйрәнергә тейешһегеҙ. Аҫҡы аңығыҙҙы дәртләндереүҙә уйҙағы образдар һәм илһамланыу ҙур роль уйнай.

9. Һеҙҙең аңығыҙ бер үк ваҡытта һәм бер үк мәлдә бары тик бер генә уйҙы фокуста тоторға һәләтле. Бынан сығып, һеҙ әлеге ваҡытта уйлаған һәр уйығыҙ ҡиммәтле һәм ыңғай булыуына ынтылырға тейешһегеҙ. Әгәр кире, аптыратырлыҡ уй-фекер килде икән, уны тиҙ генә ыңғай фекергә алмаштырырға тырышығыҙ. Ҡасан емешле һәм рухландырырлыҡ фекерләү ғәҙәтенә өйрәнәһегеҙ, ул саҡта көсһөҙ уй-фекерҙәр аңығыҙ менән идара итеүҙән туҡтар.

10. Һеҙҙең аңығыҙҙа уңыш механизмы һалынған, ул ыңғай дәрт тыуҙыра. Ул бары тик һеҙҙең бойороғоғоҙҙо ғына көтә. Ҡасан шуны аңлап, алдығыҙға бөйөк маҡсаттар ҡуя башлаясаҡһығыҙ, ул үҙенән-үҙе уянасаҡ һәм ҡуйылған маҡсатығыҙға алып барыу өсөн төрлө мөмкинлектәр табасаҡ.

**Робин ШАРМА.**

МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК



## Һүҙҙәр тураһында

**Үҙеңдең телмәреңде күҙәтергә кәрәк. Кире һүҙҙәр һәм уйҙар насар ҡылыҡҡа ҡарағанда нығыраҡ зыян килтерә. Уйҙар матдиләшә, ә хис-тойғо менән әйтелгән һүҙҙәр программа кеүек тәьҫир итә.**

Ата-әсә йыш ҡына ни өсөн балаһының насар үҫеүенә аптырай. Ә әсә кеше уға: "Ашамаһаң - үҫмәйһең", - тигән дә онотҡан. Ә бала өсөн был программа булып тора. Йәки әсә балаһының артынан: "Башлығыңды кей, юҡһа, ауырыйһың", - тип ҡысҡырып ҡала. Әлбиттә, бала ауырый, ә әсә һүҙе раҫҡа сыҡҡанына ҡыуана: "Әйттем бит мин һиңә ауырыйһың тип!" Тағы ла программалай. Тирә-яғыбыҙҙа тик шундай программалау ғына бара: ауырыйһың, һындырырһың, йығылырһың, ауыртынырһың һ.б... Ә һуңынан ни өсөн шулай булғанына аптыраған булабыҙ.

Нескә планда бөтөн нәмә килешеү буйынса бара. Әгәр һеҙ нимәнелер ныҡ теләһәгеҙ, шулай булһын, тип әйтеүҙәре мөмкин. Мәҫәлән, бер ҡатындың өлкән йәштәге әсәһе ҡаты ауырый. Ҡатын ихлас күңелдән: "Әсәйем һауыҡһын, уның урынына мин ауырыһам ине", - ти. Һөҙөмтәлә әсәһе һауыға, ә ҡатындың үҙендә күкрәк яман шеше табалар.

Йыш ҡына көйәрмәндәрҙең: "Мин шул команда, шул актер, спортсы өсөн "ауырыйым",- тигәнен ишетергә тура килә. Ә ниңә улар өсөн көйөргә, "ауырырға", уларҙың проблемаларын үҙеңә тартып алырға һуң?

Бәхәстәрҙә еңергә тырышмағыҙ. Беренсенән, был энергия сарыф итеү, икенсенән, еңеүҙең (победа) тамырында "беда" һүҙе ята. Бер генә йән дә бәхәсләшмәй, һәр саҡ Эго йәки бире бәхәсләшә. Һәр кемдең үҙ хәҡиҡәте, шуға бәхәсләшеп тороу мәғәнәһеҙ. Мәҫәлән, бала: "Ана, ҙур тау", - тип әйтергә мөмкин, ә альпинист: "Ул тау түгел, уба ғына", - тиер. Кем хаҡлы?

Һөйләгәндә бик иғтибарлы булырға кәрәк, сөнки хәҙерге ваҡытта һүҙ көсө бик ҙур. Мәҫәлән, ҡатыны магазинға барырға әҙерләнә, ире унан: "Аҡса кәрәкме?" - тип һорай. Ул: "Юҡ, кәрәкмәй", - тип яуаплай (уның аҡсаһы бар). Әммә асылда уға аҡса кәрәкмәй булып килеп сыға. Нескә планда быны һүҙмә-һүҙ аңлап, аҡса ағымын туҡтатып ҡуйыуҙары мөмкин. Ҡатынға бары тик: "Рәхмәт, минең аҡсам бар", - тип кенә әйтергә ине. Яуап бирер алдынан һәр саҡ уйларға кәрәк. Үҙегеҙҙең лексиконды тулыһынса ҡайтанан ҡарап сығығыҙ. Бары тик ыңғай һүҙҙәр генә ҡулланығыҙ, хатта шаяртҡанда ла. Шуны ла иҫәпкә алырға кәрәк: нескә планда нимәне күҙ алдына килтерҙең - шул бар һәм ул физик планда матдиләшә ала. Шуға күрә бер ваҡытта ла бер кемгә лә үҙегеҙҙең ауырыуығыҙ тураһында һөйләмәгеҙ, зарланмағыҙ (кешеләр күҙаллай - матдиләштерә).

Әгәр кеше барыһына ла ҡайһылыр еренең ауыртыуы тураһында һөйләй икән, иртәме, һуңмы, ул ағза мотлаҡ ауырта башлаясаҡ - коллектив күҙаллауҙан кире эфир тән барлыҡҡа килә, ә физик тән уның аныҡ күсермәһе. Һәм, киреһенсә, барыһы ла һәйбәт, тиһәң, шулай буласаҡ та!

Әгәр кемдер сөскөрһә, "Сәләмәт бул!" тибеҙ. Әммә беҙ шулай итеп уның сәләмәт түгеллеген теркәйбеҙ, йәғни уны сәләмәт булмауға программалайбыҙ. Иң яҡшыһы: аң менән уларҙы саҡ ҡына алдараҡ уҙып китеп, "Һин сәләмәт!" тиергә кәрәк, тап шул саҡта кеше сөскөрә, йәғни һеҙҙең әйткәндәрегеҙҙе раҫлай.

**Рауфан МОРТАЗИН.**



## 23 АПРЕЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Женский журнал"
09.50 "Жить здорово!"
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Два цвета страсти". Сериал
13.25 "Криминальные хроники"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Обручальное кольцо". Сериал
16.10 "Право на защиту"
17.05 "Среда обитания"
18.00 Вечерние новости
18.45 "Давай поженимся!"
19.50 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Лето волков". Военная драма
22.30 "Первый класс" с Иваном Охлобыстиным"
23.30 "Вечерний Ургант"
00.00 "Познер"
01.00 Ночные новости
01.20 "Непутевые заметки" с Дм. Крыловым"
01.40, 03.05 "Служить и защищать"
03.00 Новости
03.30 "Игорь Тальков. Поверженный в бою"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести - Башкортостан"
09.00 "С новым домом!"
